**✓Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 25 сентябрҙән 4 октябргә тиклем Бөтә Рәсәй гәзит-журналдарға яҙылыу аҙналығы иғлан ителә. Был көндәрҙә "Киске Өфө"гә (50665 индекс) яҙылыу хаҡы - 471 һум 72 тин, инвалидтар һәм һуғыш ветерандары өсөн - 419 һум 34 тин тәшкил итәсәк. Һуңлап ҡалмағыҙ!**


# Киске Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

20 - 26 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№38 (612)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Доллар менән хушлашыу...**

кемгә ауырға төшәсәк?



3

**Бер алдаҡ тарихы**

8-9

**Ҡарайһы килә донъяға**

Бәхетле түбәләрҙән...



10

**Һыу менән ҡойон һәм...**

изгелек эшлә



12

14 **ТВ-программа**


*КӨНАУАЗ*

# РЕСПУБЛИКА ХАЛҠЫ...

## етеш йәшәһен

**Төбәк Үҙәк һайлау комиссияһы ваҡытынан алда Башҡортостан Республикаһы Президентын һайлауҙа тауыш биреүҙәргә йомғаҡ яһаны.**



Тауыш биреү тамамланған мәлгә исемлеккә индерелгән һайлаусылар һаны 3 миллион 27 мең 300 кеше тәшкил итә. Һайлауҙа ҡатнашҡандар һаны - 2267077. Башҡортостан һайлаусылары иң күп тауышты Рөстәм Хәмитовҡа биргән - 1 миллион 851 мең 625 (81,71 процент).

Илдар Бикбаевҡа һайлаусыларҙан 59475 кеше (2,62 процент), Юнир Ҡотлоғужинға - 229452 (10,13 процент), Иван Сухаревҡа 109040 (4,81 процент) кеше тауыш биргән.

Башҡортостан Республикаһы Президенты итеп Рөстәм Хәмитов һайланды. Ул "Берҙәм Рәсәй" бөтә Рәсәй сәйәси партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе" һайлау берекмәһе тарафынан күрһәтелгәйне.

"Президент вазифаһы минең өсөн яңы түгел, минең өсөн бер нәмә лә үҙгәрмәй. Һайлауҙарҙан һуң быға тиклем ниндәй эшмәкәрлек алып барғанмын, нимәгә өҫтөнлөк биргәнмен, ниндәй маҡсаттар ҡуйғанмын, артабан да шул йүнәлештә эшләйәсәкмен. Минең өсөн иң мөһиме - кешеләр етеш йәшәһен", - тип белдерҙе республика Президенты Рөстәм Хәмитов журналистар менән осрашыуҙа.

**(Дауамы 4-се биттә).**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Рәсәйҙә "Әҙәпле кешеләр көнө" байрам ителеүгә нисек ҡарайһығыҙ?

***Рафик ИШМӨХӘМӘТОВ, хаҡлы ялда, Өфө ҡалаһы:*** Бик тә ыңғай ҡарайым. Ҡырымдағы референдум ваҡытында Рәсәй Президенты Владимир Путин, "Әҙәпле кешеләр көнө" байрамы хәүефһеҙлекте тәьмин итеүсе хәрбиҙәргә бағышланасаҡ, тиелһә лә, ул һәр кеше өсөн мөһимдер, тип уйлайым. Әҙәплелекте кешенең йәмғиәттә үҙен тәрбиәле тотоуына ғына ҡайтарып ҡалдырыу дөрөҫ булмаҫ ине. Ул барыһына ҡарата ла ихтирамлы ҡараш, иғтибарҙы, ярҙамға мохтаж булғандарға хәленән килгән тиклем булышлыҡ итеүҙе, тәрбиәлекте, изге мөнәсәбәтле булыуҙы үҙ эсенә ала. Барыбыҙҙа ла ошо сифаттар өҫтөн булғанда, тормош йәмлерәк, донъябыҙ гүзәлерәк булыр ине. Ләкин, ҡыҙғанысҡа күрә, эргә-тирәбеҙҙә тупаҫ, тәкәббер ҡыланыусы, үҙҙәрен барыһынан да өҫтөн ҡуйып, башҡаларға кәмһетеп ҡараусылар ҙа әҙ түгел. Ундайҙар өсөн, бәлки, был байрам үҙ холҡо тураһында уйланыуға, насар ғәҙәттәре өҫтөндә эшләүгә һәм уларҙы төҙәтеүгә этәргес булыр. Нисек кенә булмаһын, һәр яңы башланғыста тик яҡшыны ғына күрергә һәм һәйбәткә юрарға кәрәк. Ниндәйҙер насар сифат пропагандаланмай, ә оло йөрәклелек, намыҫлылыҡ, выжданлыҡ, нәзәкәтлек, кешенең юғары эске мәҙәниәте алғы һыҙыҡҡа сығарыла. Тимәк, бындай көндөң, байрамдың булыуы тик ыңғай күренеш.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЙЫЛЫНҒЫҢ КИЛҺӘ...

**Федераль ҡануниәткә ярашлы, йорттарға йылылыҡ урамда һауа температураһының биш тәүлек рәттән һигеҙ градус йылылыҡтан түбән булған ваҡытта бирелә.**

Әммә ҡулланыусылар билдәләнгән мәлде көтмәйенсә, йылылыҡты үҙҙәре теләгән ваҡытта алыу мөмкинлегенә эйә. Бының өсөн күп фатирлы йортта йәшәүселәр советы идара итеү ойошмаһына ғариза яҙырға тейеш. Әгәр шундай ғариза юҡ икән, йылылыҡ биреүҙе идара итеү ойошмаһы үҙе хәл итә.

Шуны ла иҫкә төшөрөү зарур: йылылыҡ бирелеү менән ул шунда уҡ фатирҙарға килә тип өмөтләнергә ярамай. Бының өсөн 10-12 тәүлеккә тиклем ваҡыт үтеүе лә ихтимал.

*АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО*

# АУЫЛДАРЫБЫҘҘАҒЫ...

## иң кәрәкле кешеләр улар

**"Донъяның төҙөклөгө лә, боҙоҡлоғо ла - ҡатындарҙан", тигән әйтеме бар беҙҙең халыҡтың. Был һүҙҙәр бөтөн яуаплылыҡты тик гүзәл заттар иңенә һалып, уңышһыҙлыҡ өсөн дә уларҙы ғәйепләп, ауыр тормош шарттарының сәбәптәрен дә уларҙан эҙләргә тигәнде аңлатмай әле. Ул ғаилә усағының йылыһын һаҡлаусы, киләсәк быуынды тәрбиәләүсе, ил тоткаһы - ирҙәрҙең иң терәр таянысы булған ҡатын-ҡыҙҙың әхлаҡ, тәртип, рух төшөнсәләрен үҙ эсенә индергән сифаттарҙы балаларының аңына һеңдереп үҫтереүенә, йәмғиәтте сиктәрҙән сығармай тотоуға ҡағылышлы әйтелгәндер. Донъялағы бөтөн ғауға, ғәҙелһеҙлек, буталсыҡтар өйҙә тәрбиә күрмәгән, инә һөтө менән күңеленә шәфҡәтлек инмәгән бәндәләр арҡаһында килеп сыға түгелме? Борон ата-бабаларыбыҙ нәҡ шуны уйлап та ҡатын-ҡыҙҙарҙы донъя тотҡаһына тиңләгәндер, тигән фекергә килende ошо көндәрҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының Әбйәлил районында үткәрелгән республика кимәлендәге йыйынында.**



**(Дауамы 6-сы биттә).**

✓ *Ырыуҙаштарыбыҙ төрлө район территорияһында йәшәүгә ҡарамаҫтан, айырымланмаһын - айырылғанды айыу ашай, тиҙәр. Һәр ырыу үҙ ҡорбашын һайлаһын, йыл һайын йыйындар үткәрелһен.*



## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Рәсәйҙә "Әҙәпле кешеләр көнө" байрам ителеүгә нисек ҡарайһығыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Рөстәм ДӘҮЛӘТКИРӘЕВ, полиция хеҙмәткәре:*** Шәхсән үҙемә килгәндә, календарҙағы ҡыҙыл менән билдәләнгән көн минең өсөн байрам түгел. Ғаиләм менән бергә ниндәйҙер юғары уңышҡа өлгәшелгән, бик тә мөһим ниәтте тормошҡа атҡарып сыҡҡан көндө генә матур байрам итеп билдәләйбеҙ. Улар әллә ни күп тә түгел, ләкин барыһы ла мөһим һәм күркәм. Шуға күрә, календарға тағы бер байрам көнөнөң өҫтәлеүенән миңә эҫе лә түгел, һыуыҡ та түгел, тигәндәй. Рәсәйҙә һәр көн тиерлек ниндәйҙер байрам, иҫтәлекле дата билдәләнә. Яңыраҡ кәрәҙле телефонға "Ҡырлы стакан көнө" менән ҡотлап, смс-хәбәр килеп төштө. Бөтә ил масштабында ҡырлы стаканға әһәмиәт бирелгәс инде, әҙәпле кешеләр көнөн билдәләүҙең дә бер хилафлығын да күрмәйем. Ни тиһәң дә, әҙәплелек донъяны үҙ күсәрендә тотоп тороусы сифаттарҙың береһе. Кешенең тәрбиәле, зыялы, намыҫлы булыуы менән тығыҙ бәйләнеп килеүе әҙәплелекте әһәмиәтле итә. Ләкин ҡайһы берәүҙәр артыҡ ҡыланып, уның күркәмлеген юғалта. Ошонан һаҡланырға кәрәк.

***Рәшит ҒИЗЗӘТУЛЛИН, эшҡыуар:*** "Әҙәпле кешеләр" термины интернет селтәрендә лә, төрлө матбуғат биттәрендә лә көндән-көн киңерәк популярлыҡ яулай. Владимир Путиндың еңел ҡулы менән ҡулланылышҡа ингән был һүҙбәйләнеш көндән-көн йәмғиәттә нығыраҡ тамыр йәйә. Рәсәй Хәрби көстәренең яңы символына әйләнә барған был терминды үҙ сығыштарында бигерәк тә сәйәсмәндәр күп ҡуллана. Бындай көндө булдырыуҙы тәҡдим итеүселәр фекеренсә, ул ил берҙәмлегенең яңырыуын символлаштырыусы байрам булараҡ билдәләнәсәк. Шулай уҡ "Әҙәпле кешеләр көнө" үҫеп килеүсе быуында патриотлыҡ рухы тәрбиәләргә лә булышлыҡ итәсәк, тип күҙаллана. Ләкин миңә был байрамдың төп тәғәйенләнеше барыбер аңлашылмай: был көндө Ҡырымда тыныс референдум барышын тәьмин итеүсе хәрбиҙәр генә билдәләйәсәкме, әллә бындай хоҡуҡ барыбыҙға ла биреләсәкме? Дәүләт Думаһы депутаты, ошо көндө булдырыу инициативаһы менән сығыш яһаусы Игорь Зотов белдереүенсә, Ҡырым халҡы ағымдағы йылдың мартында улар тормошонда мөһим роль уйнаған "әҙәпле кешеләр"ҙе оло рәхмәт һүҙҙәре менән иҫкә ала. Тимәк, календарҙа барлыҡҡа киләсәк байрам көнө улар өсөн тәғәйенләнгән. Тик шуныһы - үҙҙәренең хәрби бурысын үтәгән, ябай итеп әйткәндә, эштә булған кешеләр ниндәй юғары уңыштары өсөн айырым байрам көнө менән "бүләкләнәләр"?

Шулай ҙа дөйөм һүҙ йөрөткәндә, әҙәплелек, әлбиттә, һәйбәт күренеш. Ундай байрамдың булыуы ла зыян итмәҫ. Тик ни өсөн уны 7 октябрь көнө билдәләргә итәләр? Белеүемсә, Ҡырымда референдум 16 мартта уҙҙы. Бында ҡайһы берәүҙәрҙең байрамды ил башлығының тыуған көнөнә тура килтереп, уның алдында үҙен күрһәтергә теләүе һәм яҡшы мөнәсәбәтен яулау ниәте асыҡ ярылып ята. Ә был иһә, миңә ҡалһа, әҙәпһеҙлектең бер сағылышы.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТУҒАНЛЫҠ ЕПТӘРЕН...

## ырыу йыйындары менән дә нығытайыҡ

**Сабир ШӘРИПОВ, яҙыусы, кирәй-ҡыпсаҡ ырыуының ҡорбашы:** Һәр замандың үҙ ауырлыҡтары, һикәлтәләре. Әммә бөгөнгө менән генә йәшәргә ярамай. Һәр кемгә халҡының тарихи үткәнен белеү зарур. Башҡорттар тураһында үҙебеҙҙән тыш күршеләр, яҡын ҡан-ҡәрҙәштәребеҙ нимә уйлауы ла бик мөһим. Заманалар үтеү, илдәге идеология үҙгәреү менән тарихҡа ҡарата мөнәсәбәттәр ҙә, ғәҙәттә, икенсе төрлөгә әйләнә. Мәҫәлән, беҙ уҡыған саҡта Совет осоро китаптарында хандар, батырҙар тураһында телгә лә алынмай торғайны. Ата-бабаларыбыҙ шундай осорҙа йәшәгән икән, милләтебеҙ ғорурлығы булырҙай шәхестәребеҙ булған икән, тип тә белмәнек. Студент саҡта, "Кем булырға теләр инең?" тигән һорауға шаяртып: "Хан булыр инем", - тип яуап биргәнем өсөн уҡытыусынан да, иптәштәремдән дә бик ҡаты шелтә ишетеүем һаман да иҫемдә. Әммә бөгөн улар тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләй ҙә, уларға оҡшарға тырышыу ҙа яҙыҡ һаналмай. Тарихты мөмкин тиклем дөрөҫ, объектив күҙлектән сығып өйрәнеүҙән килә был. Киләсәк быуындар ҙа тарихи үткәндәребеҙгә, рухиәтебеҙгә ыңғай мөнәсәбәттә булһын, белергә ынтылһын өсөн артабан йәштәрҙә ырыу шәжәрәһенә ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙы арттырырға кәрәк, тип иҫәпләйем. Ырыу йыйындары тик яҡташтарҙы, ырыуҙаштарҙы бер урында осраштырып ҡалмай, ул ҡан-ҡәрҙәштәрҙе берләштерә, яҡын туғандарҙы бер-береһенә өйләнеүенән һаҡлай, йәштәрҙең күңелен, рухиәтен байытыу йәһәтенән дә әһәмиәтле. Бынан тыш, был сара сәйәси мәсьәләләрҙән ситтә тора, ул тик урындағы халыҡты борсоған ижтимағи-мәҙәни-социаль һорауҙарҙы күтәрә. Бөгөн донъяла барған ваҡиғалар, туғандарҙың бер-береһенә ҡаршы ҡорал күтәреп сығыу күренештәре тап бына тарихи туғанлыҡты аңламау, бер тамырҙан булыуҙарын танымау арҡаһында килеп сыға. Сөнки халыҡтар дуҫлығы тураһында һүҙ һөйләп кенә ҡаршылыҡтарҙы көйләп булмай, кешеләрҙең күңелендә булырға тейеш ул туғанлыҡ хисе. Башҡа милләттәрҙә үҙенең нәҫелнәсәбен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, телен, йыр-бейеүҙәрен белеү, балаларға өйрәтеү тигән төшөнсә онотолһа ла, башҡорт был турала иҫенән сығармаһын ине. Ырыуҙаштарыбыҙ төрлө район территорияһында йәшәүгә ҡарамаҫтан, айырымланмаһын - айырылғанды айыу ашай, тиҙәр. Һәр ырыу үҙ ҡорбашын һайлаһын, йыл һайын йыйындар үткәрелһен. Мәҫәлән, беҙ, кирәй-ҡыпсаҡтар, киләһе йыл бишенсе тапҡыр йыйылырға ниәтләйбеҙ. Быға тиклем ырыу йыйынын Ишембай һәм Белорет райондары ауылдарында үткәргәйнек, был юлы ҡәрҙәштәр Ғафури районының Ташбүкән ауылында йыйыласаҡ. Йыйын, ҡор туплап, күрешеп, кәңәшләшеп, бер-беребеҙҙе танып, ярҙамлашып йәшәйек.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле башланды. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнен тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

• Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн сентябрҙән **50665** индекслы "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тингә** яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән 50673 индекслыһының хаҡы - **543 һум 72 тин**.

• Сентябрҙә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **С. Руденконың "Башкиры"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ башҡортса **"Дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныр.



**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **252 һум**.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **252 һум**.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Кремлдә РФ Президенты Владими Путин рәйеслегендә үткән РФ Дәүләт Советы ултырышында ҡатнашты. Сара ватан эшҡыуарлығын үҫтереү һәм уның донъя баҙарында конкурентлыҡҡа һәләтлеген күтәреү мәсьәләләренә арналды. "Алдағы йыл ярым-ике йыл эсендә Рәсәй баҙарының конкурентлыҡҡа һәләтлеген күтәреүҙә ныҡлы ынтылыш яһалырға тейеш", - тип билдәләне В. Путин һәм был маҡсатҡа өлгәшеүҙең алдынғы йүнәлештәрен һанап сыҡты.

✓БР Хөкүмәте йортонда Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһының Йәштәр инновацион форумын үткәреү һәм әҙерләнеү буйынса ойоштороу комитеты ултырышы булып үтте. БР Премьер-министры Салауат Сәғитов билдәләүенсә, Өфөлә 7-10 октябрҙә үтәсәк был сарала Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары вәкилдәре, шулай уҡ Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Тажикстан, Ҡырғыҙстан һәм Ҡытай вәкилдәре лә ҡатнашасаҡ.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә Премьер-министр урынбаҫары Эрнст Исаев рәйеслегендә төбәк баҙарында ауыл хужалығы продукцияһы нисбәтен көйләү буйынса республика штабының икенсе ултырышы үтте. Билдәләнеүенсә, республиканың аҙыҡ-түлек баҙарында 15 төрлө продукция буйынса, 600-ләп предприятиела хаҡтар мониторингы көн һайын үткәрелә. Хаҡтарҙы нигеҙһеҙ күтәреү осраҡтарын асыҡлауға БР Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты ҡарамағында ойошторолған "Тиҙ бәйләнеш" ярҙам итә.

✓Рөстәм Хәмитов 2014 йылда Республика көнөн әҙерләү һәм үткәреү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Ойоштороу комитеты рәйесе итеп Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев тәғәйенләнде. Комитет составына юғары звеноның 30 етәксеһе инә.

✓Берҙәм тауыш биреү көндө 14 сентябрҙә 43-сө Красный Холм һайлау округы буйынса Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутатын өҫтәмә һайлауҙар үтте. Бында вакантлы урынға биш кандидат теркәлгәйне. "Берҙәм Рәсәй" сәйәси фирҡәһенең төбәк бүлексәһе тарафынан тәҡдим ителгән Булат Йомаҙилов еңеү яуланы, тип хәбәр иттеләр Үҙәк һайлау комиссияһында. Тауыш биреүҙә ҡатнашҡан 32599 һайлаусының 69,98 проценты уның өсөн тауыш биргән.

ИҠТИСАДИ ХӘЛДӘР

# ДОЛЛАР МЕНӘН ХУШЛАШЫУ...

## кемгә ауырға төшәсәк?



**Көн һайын ҡулда доллар тотоп йөрөмәһәк тә, магазиндарҙа был валюта менән иҫәпләшмәһәк тә, уның һәр беребеҙҙең тормошонда ярайһы ғына ҙур роль уйнауын инҡар итеп булмай. Һуңғы ваҡытта сауҙа итеүҙә Рәсәйҙең Америка долларынан баш тарта алыу-алмау мөмкинлеге тураһында һорау йыш яңғырай. Был мәсьәлә бигерәк тә көнбайыш илдәренең Рәсәйгә ҡарата ҡулланған санкциялар һаны артҡан һайын актуалләшә бара.**

Әлбиттә, был мәсьәләне ҡапыл һәм тиҙ хәл итеп булмай. Ләкин Рәсәй тарафынан был йүнәлештә тәүге аҙымдар эшләнде тиергә лә була. Ағымдағы йылдың июнендә Рәсәй Үҙәк банкы менән Ҡытай Халыҡ банкы араһында ике яҡлы сауҙа операциялары өсөн иҫәпләшеүҙе һумдарҙа һәм юандәрҙә башҡарыу тураһында һөйләшеүҙәр булды. Шулай уҡ Рәсәйгә ҡаршы санкцияларҙы хупламаған һәм беҙҙең менән тауар әйләнешен туҡтатмаған илдәр менән дә долларһыҙ иҫәпләшеү юлдарын барлау дауам итә. Мәҫәлән, Тегеранда ике ил делегацияһы нисек итеп доллар ҡулланмайынса Рәсәйҙе Иран нефте менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итте. Һәр гениаль әйбер ябай була, тигәндәй, көнбайыштағы "дуҫтар" валюталарын ситкә "типкән" илдәргә баҫым яһамаһын өсөн, нефть өсөн хаҡ доллар менән түгел, ә тауарлата ҡайтарыласаҡ. Килешеүгә ярашлы, Иран Рәсәйгә нефть бирә, ә Рәсәй быныӊ өсөн уларға электр станциялары төҙөй. Артабан был нефть Рәсәйҙеке тип һанала һәм ул уны үҙе теләгән һатып алыусыға һатыу мөмкинлеге ала. Күренеүенсә, был алыш-биреш итеүҙә бер ниндәй валюта ла ҡулланылмай. Бары тик контакттың дөйөм хаҡы ғына доллар эквивалентында әйтелә - 5 миллиард доллар. Әлбиттә, АҠШ бындай ҙур сумманан ҡолаҡ ҡағыу мөмкинлеген тыныс ҡына үткәреп ебәрә алмаясаҡ, шуға күрә яҡын арала был килешеүгә ҡағылышлы берәй хәбәр ишетәсәгебеҙгә шик юҡ.

Ике ил араһында шулай уҡ долларҙы ҡулланмайынса ғына Ирандың Рәсәй бойҙайы менән тәьмин итеү тураһында ла һөйләшеүҙәр алып барыла. Әгәр ҙә был йәһәттән дә килешеүгә өлгәшелһә, Рәсәй Иранға йылына 2-3 миллион тонна бойҙай бирәсәк, тип күҙаллана. Иран иһә, үҙ сиратында, бойҙай өсөн Рәсәйгә нефть ҡыуасаҡ. Был килешеүҙең дөйөм хаҡы, әлеге лә баяғы доллар менән иҫәпләгәндә, 0,7 миллиард долларға барып баҫасаҡ, тип билдәләнә. Океан арьяғындағыларға был сумманан да өләш сыҡмаясаҡ. Быға тиклем еңел генә кеҫәләренә тамып түгел, ә ағып торған килемдән ҡолаҡ ҡаҡҡандарҙың хәл-торошон күҙ алдына килтереп була. АҠШ-тың ҡайһы бер матбуғат баҫмалары был аҙымды "Рәсәйҙең санкцияларға ҡаршы яңы һөжүме", тип билдәләне. Шулай уҡ бындай сауҙа мөнәсәбәттәрен "урта быуат иҡтисадына кире ҡайтыу" тип тә атаусылар бар. Үәт әй! Үҙ ваҡытында нефть өсөн хаҡты Рәсәйгә "Буш аяҡтары" менән ҡайтарғанда был ғәҙәти хәл, тип һаналһа, хәҙер килеп иҡтисади яҡтан артта ҡалыу, имеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был хәлдәргә ҡарата "Эт өрә торор, бүре йөрөй торор", тигән мәҡәлебеҙ тап-таман. Үҙен донъя хакимы итеп тойоусы һәм башҡаларға нимә эшләргә һәм нисек йәшәргә кәрәклеген өйрәтеп маташыусылар һәр ваҡыт табылып торა. Ләкин һәр сәңкелдәгән эттән ҡурҡып йәшәргә булһаҡ, күптән инде бөйөк дәүләт булыуҙан туҡтар инек. Шуға күрә Ҡытай һәм Иран менән булдырылған килешеүҙәр Рәсәй өсөн һуңғылары булмаҫ, тип ышаныслы әйтергә була.**

Гөлназ САФУАНОВА
әҙерләне.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ҮЛГӘНДӘРҘЕҢ ҠӘБЕРЕН БЕЛ!

**Өфөгә барып, Рәми Ғариповтың ҡәбере урынлашҡан зыяратҡа инеп, шағирҙың рухына бағышлап аяттар уҡыу һәм сәскәләр һалыу күптәнге теләгем ине. Быйыл йәй мин был теләгемде тормошҡа ашыра алманым, зыяратта шағирҙың ҡәберен таба алманым. Быйыл август айында иһә зыяраттағы ҡарауылсы бабай ярҙамында Рәми ағайҙың ҡәберен табырға насип булды.**

Нишләптер, танылған халыҡ шағирыныӊ ҡәберен мөһабәт, тапалған киң һуҡмаҡлы, ҡараулы, матур сәскәләргә күмелгән, мәрмәр таҡтаташлы тип күҙ алдына килтерә инем. Ысынбарлыҡта ҡәбер зыяраттың сиктәндә ҡыҫыҡ ҡына урында урынлашҡан булып сыҡты. Таҡтаташында "Яҙыусы Р.Ғарипов" тип кенә яҙылған, ләхете емерелгәнмелер, ҡәбер өҫтөндәге плита ҡыйшайған, күптән ҡаралмаған кеүек. Был күңелдә ауыр тойғо ҡалдырған күренеште тәүҙәтеү тураһындағы һүҙҙәремде кемгә төбәргә лә белмәйем, бары тик "Исеме телдән төшмәгән шәхестең ҡәбере лә исеменә, данына лайыҡлы булырға тейештер ул", тип кенә әйтке килгәйне. Зыяратта бик күп арҙаҡлы шәхестәр - яҙыусылар, артистар, хөкүмәт ағзалары, хәрбиҙәр, геройҙар ерләнгән, араларында мөһабәт постамент ҡуйылған, мәрмәр юлдар һалынған ҡәберҙәр күп. Тимәк, улар тураһында хәстәрлек күреүселәр, юллап йөрөүселәр бар. Ә Рәми ағай тураһында кем хәстәрләргә тейеш? Әйҙәгеҙ, бындай кешеләре булмаһа, беҙ, йәмәғәтселек, үҙ бурысыбыҙ итеп алайыҡ уның ҡәберен тәҙәкләндереүҙе. Ни әйтерһегеҙ?

Хөрмә БИКТИМЕРОВА.
Баймаҡ районы.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# ӘҘӘМДЕ ӨМӨТ ЙӘШӘТӘ...

## ғәм ҡаҡшата

**Унынсы сентябрҙә Бөтә донъя суицидты булдырмау көнө билдәләнде. Календарҙа билдәләнә, байрам ителә торған төрлө даталар бихисап хәҙер, әммә тап быны ошо көндө нисек итеп билдәләмәк кәрәк ине икән? Элмәктән ҡотолоп ҡалған кешеләр менән әңгәмәләшергәме, әллә буласаҡ "кандидаттар" менән берәй сара үткәрергәме? Шунлыҡтандыр, төрлө дәүләт органдары тарафынан был сара инҡар ителде, тиһәң дә хата булмаҫ.**

Әлбиттә, морҙар үлеме тураһында рәсми статистика юҡ тиерлек. В.П. Сербский исемендәге Психиатрия институты хеҙмәткәре Борис Положий мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы 20 йылда Рәсәйҙә 1 миллион кеше үҙ-үҙенә ҡул һалған. Тимәк, йыл һайын беҙҙең арanan 50 мең кеше үҙ ирке менән "теге донъяға" китеп тора. Көнөнә яҡынса 140 кеше үҙ теләге менән ошо юлды һайлай. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, бөгөн суицид бөтә үлем сәбәптәре араһында 13-сө урынды биләй, ә 15-44 йәштәгеләр араһында 4-се урынға тиклем күтәрелә. 2020 йылға суицид 1,5 тапҡырға артасаҡ, тип күҙаллайҙар. Донъя буйынса йыл һайын 1 миллион кеше үҙенә ҡул һала, тигән мәғлүмәт тә бар. Латин Америкаһы һәм ғәрәп дәүләттәрендә был күрһәткес иң түбәне. Беренсе урынды Көнсығыш Европа дәүләттәре биләй. Рәсәй күп йылдар беренсе тиҫтәлә барһа, яңыраҡ ул 14-се урынға күтәрелде. Уртаса күрһәткес донъя буйынса 100 мең кешегә 14-15 үлем тәшкил итһә, беҙҙә был ике тапҡырға күберәк. Рәсәй төбәктәре араһында Алтай, Тыва, Чукотка, Ненец автономия округы лидерҙар рәтендә - унда 100 мең кешегә уртаса 60 суицид осрағы тура килә.

Ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда 5 тапҡыр йышыраҡ үҙенә ҡул һала, ә донъяла - 3 тапҡырға артығыраҡ. Үсмерҙәр буйынса ла беҙҙең күрһәткестәр уртасанан юғарыраҡ: 100 мең үҫмергә 16 үлем осрағы тура килә (донъя буйынса - 6-7).

Был күрһәткестәр Рәсәйҙә лә хәлдең бик аяныс булыуы тураһында һөйләй. Социалистик лагерь тарҡалғас, баҙар шарттарына ҡулайлаша алмаған Көнсығыш Европа дәүләттәре халҡы араһында суицидтың йыш осрауы юҡҡа түгелдер. Был йәһәттән бер сағыштырыу урынлы булыр. Реформаторҙар баҙар иҡтисадына күскәндә Советтар Союзын тәнҡитләп, коллективлаштырыу ваҡытында булған демографик юғалтыуҙарҙы йыш ҡына миҫал итеп килтерҙе, йәнәһе, шул осорҙа халыҡ араһында үлем осраҡтары йышайған. Сағыштырып ҡарайыҡ. Был мәғлүмәттәр Википедиянан алынды: 1914-1918 йылдарҙа - 1,17 миллион ( Рәсәй (РСФСР) халҡына ҡарата 1,3 процент), 1918-1922 граждандар һуғышы, ҡыҙыл һәм аҡ террор осоронда - 0,35 млн (0,3 процент), 1918-1922 йылдарҙағы эпидемия, аслыҡ осоронда - 4,5 млн (2,3 процент), 1932-1953 йылдарҙағы золом осоронда - 0, 4 млн (0,3 процент), 1932 йылғы аслыҡ осоронда - 3 млн (3 процент), 1992-2000 йылдарҙағы реформалар осоронда 4 млн (2,85 процент) кеше һәләк булған.

Тимәк, йәмғиәттә булған ҡырҡа һынылыш (баҙар реформаһы) 2,85 процент Рәсәй халҡын юғалтыуға алып килгән. Был Беренсе донъя һуғышындағы юғалтыуҙарҙан артығыраҡ. Коллективлаштырыу аслыҡҡа алып килһә, уны тарҡатыу суицидҡа дусар итте, тиһәң дә хата булмаҫ...

Бәхтийәр ӘХӘТОВ.

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ҡыш еткәнсе Башҡортостан Ҡырымдың Белогорск районына торлаҡ-коммуналь хужалыҡ системаһын яңыртырға ярҙам итте. Шулай уҡ Белогорск районында торлаҡ-коммуналь хужалыҡ объекттарын төҙөү дауам итә. Башҡортостан ярҙамында Белогорск районында юлдарға асфальт түшәлгән һәм ремонт эшләнгән, нефть битумдары, мейес һәм дизель яғыулыҡтары алынған, 13 күп фатирлы йорттоң ҡыйыҡтары йүнәтелгән, шулай уҡ балалар баҡсалары, мәктәптәр һәм дауаханалар әҙерләнгән.

✓Өфөлә Аксаков байрамы булып үтте. Тантаналар бер юлы 16 майҙансыҡта ойошторолдо. Башҡорт дәүләт филармонияһында Өфө ҡала Советы "Битлек" Йәш тамашасы театры менән берлектә гәзиттәге Аксаков балы ойошторолдо. Ул XXIV Халыҡ-ара Аксаков байрамының иң мөһим ваҡиғаларының береһе булды.Балдан һуң үткән тантаналы кисәлә ҡала Советының Сергей Аксаков исемендәге премияһына конкурс лауреаттары бүләкләнде.

✓Башҡортостан Республикаһында бөтә коммуналь инфраструктура объекттарының ҡышҡа әҙерлеге 100 процентҡа баһалана. Республиканың бөтә муниципаль берәмектәре лә Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығына ҡышҡы шарттарҙа эшләүгә әҙерлек паспорттарын тапшырырға тейеш. 2014-2015 йылдарҙың көҙгө-ҡышҡы осоронда Волга буйы федераль округы төбәктәрендә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ объекттарын әҙерләү буйынса кәңәшмәлә ошо хаҡта һүҙ барҙы.

✓Республиканың алдынғы ижади коллективтарының береһе - Милли симфоник оркестр рәсми рәүештә 23-сө ижад миҙгелен асты. Оркестр директоры Алексей Воронин һөйләүенсә, алдағы миҙгел гәзиттәгесә ваҡиғаларға бай булырға вәғәҙәләй. Миҙгелдең төп ваҡиғаһы - оркестр коллективы үҙ йортон туйлаясаҡ - ул "Башҡортостан" дәүләт концерт залына (элекке "Нефтсе мәҙәниәт йорто") әйә буласаҡ, унда күсеү октябрҙең аҙағына - ноябрҙең башына планлаштырылған.Октябрҙә БР Милли симфоник оркестры опера сәхнәһе йондоҙо Дмитрий Хворостовскийға ҡушылып уйнаясаҡ.

"Башинформ"дан.

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# СИТ ИЛ ГРАЖДАНЛЫҒЫН...

## сер итеп тотма!

**Рәсәй үҙ граждандарына сит дәүләттең икенсе, өсөнсө һәм башҡа төрлө гражданлығы булыуы хаҡында мотлаҡ хәбәр итеү йөкләмәһен ҡуйҙы. Был хаҡта ағымдағы йылдың 4 авгусынан ғәмәлгә ингән Гражданлыҡ тураһындағы Законға индерелгән төҙәтмәләр "һөйләй". Халыҡта "икенсе паспорт тураһындағы закон" исеме алған Закон шулай уҡ сит илдә йәшәү хоҡуғы биргән башҡа документтар хаҡында ла белдереүҙе талап итә. Был мәғлүмәттәр менән бүлешкеһе килмәгәндәрҙе енәйәт яуаплылығы көтә. Яңы ҡағиҙәләр бер нисә миллион рәсәйлегә ҡағылыуы мөмкин.**

Яңы законға ярашлы, башҡа сит ил гражданлығына эйә, шулай уҡ сит илдә йәшәү хоҡуғы биргән башҡа төрлө документтары (Америка грин-картаһы, мәҫәлән) булған Рәсәй граждандары Федераль миграцион хеҙмәткә хәбәр итергә бурыслы. Шул уҡ ваҡытта сит илдәрҙең студент һәм эш визаһына эйә булған граждандарға был хаҡта борсолорға кәрәкмәй, сөнки был документтар сит илдә даими йәшәү хоҡуғы биргән документтар иҫәбенә инмәй. "Рәсәй гражданлығы тураһында"ғы Закондың 6 статьяһына (3-сө бүлек) ярашлы, сит илдә даими йәшәүсе Рәсәй граждандарына миграцион хеҙмәтте билдәлеккә ҡуйыу талабы шулай уҡ ҡағылмай.

Икенсе илдең гражданлығына эйә булыу тураһындағы мәғлүмәтте Миграцион хеҙмәткә шәхси йәки Рәсәй почтаһы аша ебәрергә була. Был осраҡта документ ебәреүсенең ҡулында махсус бланктың йыртма өлөшө ҡаласаҡ һәм ул бурысын үтәүе хаҡында дәлил булып тора. Бланкты миграцион хеҙмәт бүлексәләрендә йәки почтала алырға мөмкин. Уны компьютерҙа йәки ҡулдан яҙып биреү рөхсәт ителә. Белдереү ҡағыҙын шәхси тапшырғанда Рәсәй паспортын күрһәтергә һәм сит ил паспортының күсермәһен бирергә кәрәк. Күсермәне нотариуста раҫлау талап ителмәй (Почта аша ебәргәндә, ярашлы рәүештә, Рәсәй паспортының да күсермәһен һалыу кәрәк). Законға ярашлы, бөтә документтар ҙа ағымдағы йылдың 4 октябренән дә ҡалмай миграцион хеҙмәткә тапшырылырға тейеш.

Белдереү ҡағыҙын ваҡытында тапшырмағандар административ яуаплылыҡҡа тарттырылырға һәм 500 һумдан 1000 һумға тиклем штраф түләргә мөмкин. Сит ил гражданлығы барлығы тураһында белдереүҙән баш тартыусыларҙы енәйәт яуаплылығына тарттырыу ҡаралған. Был - 200 мең һумға тиклем штраф йәки 400 сәғәткә тиклем мәжбүри эш. Хөкөмгә тарттырылыусы исемен күтәреп йөрөргә теләмәүселәргә был аҙымға бармаҫҡа кәңәш ителә. Шул уҡ ваҡытта кеше нигеҙле сәбәптәр арҡаһында (ауыр сир, дауаханала булыу һәм башҡалар) миграцион хеҙмәткә мөрәжәғәт итә алмаһа, ул законды боҙоусы тип иҫәпләнмәйәсәк.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

*КӨНАУАЗ*

# РЕСПУБЛИКА ХАЛҠЫ...

## етеш йәшәһен

**(Башы 1-се биттә).**

- Һайлауҙарҙа халыҡтың әүҙем ҡатнашыуы, уларҙың күпселеге минең кандидатурама тауыш биреүе минең өсөн асыш булды, тимәк, республика халҡы миңә ышана. Әле алып барылған сәйәсәттең дауам ителеүен теләүселәр алдында ҙур яуаплылыҡ тоям, - тип һүҙен дауам итте Рөстәм Зәки улы үткән һайлауҙарға һығымта яһап. Ул шулай уҡ бөтөн һайлаусыларға, президент вазифаһына дәғүә итеүселәргә рәхмәтен белдерҙе һәм журналистарҙың төрлө һорауҙарына яуап бирҙе.

Евросоюз тарафынан индерелгән яңы санкциялар республиканың иҡтисади сәйәсәтенә йоғонто яһаһа ла, "Газпром нефтехим Салауат", "Башнефть", "Сибур", "Башҡорт содаһы" кеүек эре предприятиеларҙың эшмәкәрлегендә етди үҙгәрештәр юҡ. "Әммә беҙ ауырлыҡтарға әҙер булырға тейешбеҙ. Был йәһәттән беҙҙең өсөн импорт тауарҙарын алыштырыу мәсьәләһе көнүҙәк. Көнбайыштан килгән запас өлөштәр, төрлө ҡоролмаларҙы үҙебеҙҙә етештереү буйынса предприятиелар өҫтәмә йөкләмә алырға тейеш. Беҙҙең катализаторҙар һорау менән файҙаланмай тиһәләр ҙә, Ишембай катализатор заводына эш етерлек. Нефть сәнәғәте предприятиелары машина төҙөүсе предприятиеларға яңы заказдар бирә. Был йәһәттән эске баҙар үҫеш ала. Ғөмүмән, республиканың финанс хәле тотороҡло, иҡтисадҡа янаған иң етди һәм ҡатмарлы хәлдәрҙе кире ҡағыу өсөн мөмкинлектәребеҙ бар. Ауыл хужалығында ла эштәр насар түгел. Әлеге мәлдә уңышты урып-йыйыу эштәре тамамланыу алдында. Республика сөгөлдөр үҫтереү буйынса ла башҡаларға өлгө булып тора ала. Малға аҙыҡ әҙерләү тулыһынса үтәлгән. Агросәнәғәт комплексындағы уңыштар республиканың дөрөҫ юлдан барыуы тураһында һөйләй. Төбәктә һөт етештереү үҫә. Шуға ла ауыл хужалығында яҡшы яҡтар ҙа күп. Ауыл эшсәндәренә техника һатып алыу, "500 ферма" программаһын тормошҡа ашырыу йәһәтенән кредит күләмен субсидиялау буйынса өҫтөбөҙгә алған бурыстарҙы үтәйбеҙ.

Журналистар төбәк етәксеһенә, алдағы 5 йыл эсендә торлаҡ хаҡтарын бар халыҡ һатып алырлыҡ кимәлгә еткереү өсөн саралар күреләсәкме, тигән һорау ҙа бирҙе. "Күпме генә төҙөһәк тә, ниндәй генә саралар күрһәк тә, торлаҡ бер ваҡытта ла етмәйәсәк, - тине Президент. - Әлбиттә, йылына 2,8-3 млн квадрат метр торлаҡ төҙөү күләменә сығырға теләр инек, быйыл был һан 2-2,65 млн квадрат метр. Һеҙ торлаҡ төҙөү өлкәһендә булған проблемаларҙы - ер участкалары етешмәүен, инфраструктураһы үҫешкән участкаларҙың булмауын беләһегеҙ. Былар ҙур сығымдар талап итә. 2014 йылда был маҡсатҡа яҡынса 2-2,5 млн һум тотонолдо. Әлегә был өлкәлә бөтөн проблемаларҙы хәл иткәнбеҙ, тип әйтә алмайым. Етмәһә, Өфөлә торлаҡҡа хаҡтар юғары. Торлаҡ менән тәьмин итеү буйынса бер нисә проект бар, шул йүнәлештә эшләйәсәкбеҙ".

Республиканың һәм баш ҡаланың ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерлек тә журналистар иғтибарынан ситтә ҡалманы. Әлеге мәлдә Өфөлә ҡунаҡханалар төҙөлөшө әүҙем бара, уларҙың күбеһендә эштәр ваҡытынан алда тамамланыуы көтөлә. "Өфө" аэропорты ла төҙөкләндерелә. 2015 йылдың март-апрелендә сәғәтенә 800 кеше үткәреү мөмкинлегенә эйә яңы терминал асыласаҡ. Был аэропорттың ҡеүәтен икеләтә арттыра.

14 сентябрҙә Рәсәйҙең күп төбәктәрендә үткән һайлауҙарға әйләнеп ҡайтып, ҡайһы бер субъекттар етәкселегенә кандидаттарға халыҡтың 80-90 проценты тауыш биреүе тотош илдә алып барылған сәйәсәттең дөрөҫ булыуы билдәһе, тине Рөстәм Хәмитов. "Тыныс, етеш тормошҡа күҙ төбәп эшләгән аҡыллы етәкселәрҙе халыҡ юғары баһалай. Бынан тыш, бында Рәсәй Президентының беҙгә булған ышанысы ла үҙ ролен үтәй. Әлеге мәлдә бар төбәк етәкселәре лә ил Президенты командаһында эшләүсе булараҡ сығыш яһай. Һөҙөмтәлә, былар барыһы ла ҙур һандар йыйырға мөмкинлек бирҙе".

Республиканың яңы һайланған Президенты өсөн инаугурация тантанаһы яҡынса 25-27 сентябрҙә буласаҡ. Ошо уҡ ваҡытта Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары менән сессиялар үткәреү ҡаралған. "Президент вазифаһындағы тәүге ҡарарҙар балаларға ҡағылышлы буласаҡ", - тине Рөстәм Зәки улы. Шулай уҡ республиканың киләһе йылдарға стратегик планын билдәләгән ҡарарҙар ҡабул ителеүе көтөлә. "Халыҡтың һайлауҙарҙа ҡатнашҡан 75 процентының 82 процентҡа яҡыны минең кандидатурамды ғына түгел, тимәк, әлеге Хөкүмәт эшмәкәрлеген яҡшы баһалай. Дөйөм алғанда, власть структуралары тотороҡло эшләне. Шуға ла Хөкүмәт структураһында ниндәйҙер ҙур үҙгәрештәр булмаясаҡ", - тине Рөстәм Хәмитов.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**



ӘЙТКӘНДӘЙ...

**17 сентябрҙә Кремлдә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй төбәктәренең яңы һайланған етәкселәренең Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин менән булған осрашыуында ҡатнашты. 14 сентябрҙәге һайлауҙарға йомғаҡ яһалды һәм киләсәккә эш пландары билдәләнде.**

**- Һайлауҙар лайыҡлы кимәлдә үтте. Шуға бәйле уны әҙерләүҙә һәм үткәреүҙә ҡатнашҡан бөтә кешеләргә: һайлау комиссиялары хеҙмәткәрҙәренә, партияларға, бойондороҡһоҙ күҙәтеүселәргә рәхмәт белдергем килә, - тине В.Путин.**

**Рәсәй Президенты яңы һайланған төбәк етәкселәрен һайлауҙарҙа еңеүҙәре менән ҡотланы һәм киләсәкке эштәрендә уңыштар теләне. "Иң мөһиме - йәмғиәт төрлө һынауҙар алдында үҙенең тупланғанлығын күрһәтте. Милли мәнфәғәттәребеҙҙе яҡларға әҙер булған, дәүләтебеҙҙе үҫтереү һәм нығытыу өсөн эшләүсе сәйәси көстәр яҡлау тапты ла инде", тип билдәләне Владимир Путин.**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Башҡортостан Республикаһы бишенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышы 27 сентябрҙә үтәсәк. Унда республиканың ете закон проектына закон статусын биреү көтөлә. Депутаттар республиканың Экология кодексы өҫтөндә эште дауам итергә ниәтләнә. Тәҡдим ителгән төҙәтмәләр автотранспорт сараларын мотор яғыулығы сифатында газды файҙаланыуға күсереү өсөн шарттар булдырыу менән бәйле.

✓ Данлыҡлы Рәсәй музыканты, яҡташыбыҙ Владимир Спиваковҡа "Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы" тигән маҡтаулы исем бирелде. Тейешле Указға республика башлығы Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйҙы.

✓ Өфөлә 2014 йылға планлаштырылған күп фатирлы йорттарҙа йорт янындағы территорияларҙы, юлдарҙы капиталь ремонтлау буйынса республика адреслы программаһы аҙағына яҡынлаша. Быйыл Өфөлә 76 йорт янындағы территория төҙөкләндерелгән. Ихаталарҙы капиталь төҙөкләндереү буйынса программалар Өфөлә дүртенсе йыл бара. 2011-2012 йылдарҙа 973 объект ремонтланған, 115 ихата территорияһы 2013 йылда тәртипкә килтерелгән. 2015 йылда йорт янындағы территорияларҙы төҙөкләндереү буйынса эштәр Өфөлә дауам итәсәк.

✓ 26 сентябрҙә Салауат Юлаевҡа арналған шиғри флешмоб уҙасаҡ, тип хәбәр итә "Йәшлек" гәзите. Сара башҡорт халҡының милли батыры вафат булған көндә Салауат Юлаев майҙанында ойоштороla. Был көндә Салауат Юлаевтың шиғырҙары башҡорт телендә генә түгел, башҡа телдәрҙә лә яңғыраясаҡ, тип аңлаттылар ойоштороусылар. Быға оҡшаш акция был көндә батырыбыҙҙың тыуған ауылында - Салауат районының Тәкәй ауылында, Учалы районының Шәрип ауылында һәм Эстонияның Палдиски ҡалаһында көндөҙгә сәғәт 12-лә башлана. Өфөлә акция көндөҙгө сәғәт 3-тә башлана.

✓ Өфөнөң Конгресс-холл бинаһында "Бергәләп - балалар хаҡына!" V бөтә Рәсәй күргәҙмә-форумы асылды. Йыл һайын уҙғарылып килгән сараны Ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға ярҙам итеү фонды ойоштора. Рәсәй Федерацияһының 62 субъектында фондтың күп кенә программалары ғәмәлгә ашырыла. Бына шулай, 2014 йылда Фонд Рәсәйҙең 38 төбәгендә 72 төбәк программаһына һәм 199 проектҡа дөйөм суммаһы 680 миллион һумлыҡ ярҙам күрһәткән.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ФОНТАНДАРЫ ЙӘМЛӘЙ...



**Өфөнөң Ленин майҙанында гидродинамик фонтан төҙөү эштәре башланды.**

Ул түңәрәк сәғәт һүрәтләнешендә буласаҡ. Ваҡытты күрһәтеүсе һандары махсус тумбаларға яҙыласаҡ.Фонтан бәргән һыу бағаналары ла бейеклеге менән айырылып торасаҡ. Сәғәт нисә булыуын иң көслө баҫым менән атылған һыу бағанаһына ҡарап белергә мөмкин. Киске мәлдәрҙә фонтан тағы ла матурыраҡ буласаҡ: уның төҫлө яҡтыртҡысы бөтә майҙанды биҙәйәсәк. Фонтандың тышҡы күренеше баш ҡалабыҙҙың "Кала дизайн үҙәге" тарафынан эшләнгән. Эштәрҙе тамамлау 2015 йылдың йәйенә планлаштырыла.

Сквер һәм парктар, бигерәк тә унда фонтандар булһа, ҡаланы йәмләп кенә ҡалмай, ә заманса мегаполисҡа ҡот һәм уңайлылыҡ та өҫтәй. Һуңғы ваҡыт был йүнәлештә ҙур эштәр башҡарыла. 2014 йылда М.Ғафури исемендәге паркта, Салауат Юлаев исемендәге баҡсала һәм Конгресс-Холл биләмәһендә үҙгәртеп ҡороу эштәре дауам итһә, Беренсе май урамындағы аллеяны һәм Театр скверын төҙөкләндереү бара.

Яҡындағы биш йылда Өфөлә 50-нән ашыу парк һәм скверҙы, шул иҫәптән Гастелло паркын һәм Непейцев дендропаркын ҡайтанан төҙөү планлаштырыла.

# ЙОРТ АЛДЫНДА ҠОТ...

**Быйыл Өфөлә күп фатирлы йорттарға капиталь ремонт һәм улар биләмәһендәге ихаталарҙы, уларға илткән юл-тыҡрыҡтарҙы ремонтлау буйынса адреслы программа тамамланыуға яҡынлаша.**

Быйыл ғына ла 76 йорт ихатаһы тәртипкә килтерелде: 22-һе - Орджоникидзе , 19-ы - Калинин, 17-һе - Октябрь, 12-һе - Киров, 2-һе Дим райондарында. Программаға эләккән ихаталар хәҙер танығыһыҙ булып үҙгәрҙе: асфальт түшәлде, йорттарға боролоу урындары киңәйтелде, автомобилдәр ҡуйыу өсөн яңы урындар булдырылды. Бында йәшәүселәргә ултырып ял итеү урындары хаҡында ла ҡайғыртылды: эскәмйәләр ҡуйып сығылды, сәскә түтәлдәренә ҡара тупраҡ килтерелде. Тиҙҙән балалар өсөн заманса спорт һәм уйын комплекстары ла төҙәләсәк.

# БАЛАЛАРҒА - БАҠСА



**Өфөнөң Орджоникидзе районындағы Тыныслыҡ урамында 48-се һанлы яңы балалар баҡсаһы асылды. Уны тантаналы асыуҙа Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов, Орджоникидзе район хакимиәте башлығы Марат Ғәлиуллин, баш ҡала мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова, "Өфө инвестиция-төҙөлөш комитеты" предприятиеһы директоры Альберт Мөсифуллин ҡатнашты.**

Яңы балалар баҡсаһы - Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың тәү сираттағы социаль мәсьәләләрҙе даими хәстәрләү һөҙөмтәһе ул. Төҙөлөш барышы ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың да иғтибар үҙәгендә булды. Республика адреслы инвестиция программаһы сиктәрендә 28 млн - федераль һәм 79 млн республика бюджетынан аҡса бүленде. "Башгражданстрой" тресы төҙөүселәренең ойошҡан эш һөҙөмтәһендә яңы объект ҡыҫҡа ваҡытта - 10 ай эсендә файҙаланыуға тапшырылды.

# ХОККЕЙ ЯРАТЫУСЫЛАРҒА

**Күптән түгел Өфөлә (Тыныслыҡ урамы, 14) яңыртылған хоккей ҡабы асылды. Орджоникидзе районындағы яңы спорт майҙаны - Өфөлә һуңғы ике йылда барлыҡҡа килгән тиҫтәләгән ошондай объекттарҙың береһе ул.**

Проект муниципаль-шәхси партнерлыҡ ярҙамында тормошҡа ашырылды. "Буринтех" йәмғиәте спонсорлыҡ итһә, "Автопласт" фирмаһы пластик ҡаптар эшләне һәм уларҙы ҡорҙо. Спорт ҡоролмаһы комплексының ике ҡапҡаһы менән хоккей ҡабы, баскетбол ҡуласаһы булған ике бағанаһы бар. "Баш ҡалабыҙҙа физик үҫеш һәм профессиональ спортты үҫтереү өсөн бик күп эшләнә, - тине сығышында Сынтимер Баязитов. - Яңы спорт ҡоролмалары асыла, сәләмәт тормош рәүеше алып барыу өсөн шарттар тыуҙырыла. Был спорт майҙаны балаларға ғына түгел, өлкәндәргә лә шатлыҡ килтерәсәк". Шуныһын әйтеп китеү ҙә кәрәктер: быйыл ғына ла Өфөлә 20 спорт ҡоролмаһы сафҡа индерелде, бишәүһе яңыртып төҙәлдө, дүртәүһендә әле эш ҡайнай.

# ҠЫШҠЫЛЫҠҠА ӘҘЕРБЕҘ

**Өфөлә 2014-2015 йылғы йылытыу миҙгеленә әҙерлек паспортына ҡул ҡуйылған.**

Әммә шуға тиклем ҡаланың торлаҡ-коммуналь хужалығы предприятиелары етди эш башҡарған. Көҙгө-ҡышҡы миҙгелгә 5 меңдән ашыу күп фатирлы йорт әҙерләнгән, шул иҫәптән 5149 йорт үҙәк йылытыу системаһы аша хеҙмәтләнереләсәк. 589 социаль объектта инженер техникаһы тулыһынса ремонтланып, һалҡындарҙы ҡаршы алырға әҙер.

Яуым-төшөмдә күҙаллап, 160 берәмек ҡар таҙартыу техникаһы старт һыҙығында тора. Был - йорт ихаталарын таҙартыу өсөн файҙаланыласаҡ техника һаны, ә төп юлдарҙы һәм квартал араларындағы юлдарҙы таҙартыу өсөн йәмғеһе 600 берәмек махсус техника йәлеп ителәсәк. Тротуарҙарҙы һәм йорт алды территорияларына һибеү өсөн 4960 кубометр ҡом, 2 мең тоннанан ашыу тоҙ әҙерләнгән. Ҡалаға йылылыҡ биреүсе предприятиелар 8,9 мең тонна күләмендә резерв яғыулыҡ менән тәьмин ителгән.

# "ҠЫҘЫЛ ӘТӘС"КӘ ҠАРШЫ

**Инорс биҫтәһендә Фронт бригадалары, 4 урамында яңы янғын һүндереү часы асылды.**

Ул Рәсәй МЧС-ы, Башҡортостан Хөкүмәте һәм Өфө ҡалаһы хакимиәте ярҙамы менән, ҡыҫҡа ваҡытта төҙөлдө. Төҙөлөшкә федераль бюджеттан 100 миллион һум аҡса бүленгән. Бер үк ваҡытта часть территорияһында ут эсенән ҡыҙ баланы алып сығыусы янғын һүндереүсегә һәйкәл - ут менән көрәшеүселәрҙең һәм ҡотҡарыусыларҙың ҡаһарманлығы символы - асылды. Тантана мәлендә водителдәргә яңы махсус техника асҡыстары бирелде.Төҙөлөш былтыр башланғайны һәм бөгөн бында янғын һүндереүселәрҙең хеҙмәте һәм ял өсөн бөтөн уңайлы шарттар тыуҙырылған заманса бина ҡалҡып сыҡты. Шулай уҡ часть территорияһында спорт майҙансығы, йүгереү юлдары бар. Унда янғын һүндереүселәр генә түгел, биҫтәлә йәшәүселәр ҙә шөғөлләнә ала.

ҺОРАУ - ЯУАП

# КИНО ЗАЛЫНА ИНГӘНДӘ...

**Дуҫым менән кинотеатрға барғанда үҙебеҙ менән һыу һәм чипсы алдыҡ. Ләкин уларҙың кинотеатр кафеһында һатып алынмауына һылтанып, киноға билетыбыҙ булыуына ҡарамаҫтан, һаҡсылар уларҙы сыҡҡанда кире ҡайтарыу шарты менән алып ҡалды. Улар законға ярашлы эш иттеләрме?**

- Был осраҡта, һис шикһеҙ, һеҙҙең хоҡуҡтар боҙолған. Кинотеатр һаҡсыларының бындай ҡылығы законһыҙ. Әгәр ҙә тағы ошондай уҡ хәлгә осраһағыҙ, законға һылтанып, үҙ хоҡуғығыҙҙы яҡлағыҙ. Бары тик ике осраҡта ғына кинотеатр хеҙмәткәрҙәре тамашасыны кино күрһәтеү залына индермәскә хоҡуҡлы. Улар иҫәбенә тамашасының йәмәғәт тәртибен боҙоуы һәм кинотеатр мөлкәтенә зарар килтереү күренештәре инә. Был хаҡта РФ Хөкүмәтенең 1994 йылдың 17 ноябрендәге 1264-се һанлы Ҡарарҙың "Халыҡҡа кино һәм видео хеҙмәттәре күрһәтеү ҡағиҙәһе"нең 25-се пунктында әйтелгән.

Шулай уҡ кинотеатр администрацияһының кинотеатрҙан ситтә һатып алынған аҙыҡ-түлекте индереүҙе тыйған ҡағиҙәһе закон буйынса тамашасыға өҫтәмә түләүле хеҙмәтте көсләп тағыу тип таныла ("Кулланыусылар хоҡуғын яҡлау тураһында"ғы РФ законының 16-сы статьяһы һәм "Халыҡҡа кино һәм видео хеҙмәттәре күрһәтеү Ҡағиҙәһе"нең 14-се пункты).

# КҮПМЕ АРА ТЕЙЕШ?

**Минең улым уҡыған мәктәптән 20 метр арала аҙыҡ-түлек магазины урынлашҡан. Унда, тәбиғи, спиртлы эсемлектәр ҙә һатыла. Мәғариф учреждениеһына яҡын магазинда спиртлы эсемлектәр һатылырға мөмкинме?**

- "Этил спирты, алкоголь һәм составында спирт булған продукцияны етештереүҙе һәм әйләнешен дәүләт тарафынан көйләү тураһында"ғы РФ Законының 16-сы статьяһына ярашлы, белем биреү учреждениеларына яҡын урынлашҡан ерҙә спиртлы эсемлектәр һатыу тыйыла. Шул уҡ ваҡытта бөтә ил өсөн билдәләнгән аныҡ ҡына ара критерийы юҡ. Мәҫәлән, Мәскәүҙә был ара 100 метр итеп билдәләнгән. Ә Өфөлә иһә спиртлы эсемлектәр һатыу нөктәләре мәктәптән 50 метрҙан да яҡыныраҡ урынлашмаҫҡа тейеш.

Әйтергә кәрәк, мәктәптәрҙән һәм башҡа балалар учреждениеларынан тыш, Өфөлә был исемлеккә шулай уҡ һаулыҡ һаҡлау ойошмалары, спорт объекттары, күмәртәләп һәм ваҡлап һатыу баҙарҙары, вокзалдар, аэропорт, граждандарҙың күпләп тупланған урындары ла инә. Ара ойошма территорияһына инеү урынынан һатыу нөктәһенә инеү урынына тиклем һанала.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Һалҡын тейһә…

**Көҙөн иртән һалҡын, һауа ныҡ дымлы булғанлыҡтан, һалҡын тейеп, тамаҡ шешеп бара. Әгәр ҙә бындай күңелһеҙлеккә тарыһағыҙ, тиҙ генә түбәндәге дауаларҙы ҡулланығыҙ:**

❖ 1 стакан йылы һыуға 1 балғалаҡ тоҙ һалып, бер нисә тамсы йод тамыҙығыҙ. Тамаҡты сайҡағыҙ. Тамаҡтың шеше ҡайта, ауыртыу тойғоһо баҫыла.

❖ Айыу баланы (жимолость), ҡурай еләге япраҡтары, бәйғәмбәр тырнағы (календула), эвкалипт, аҡ сәскә, ҡарағай бөрөһө, йүкә, ҡара ҡарағат япраҡтарынан төнәтмә эшләп, тамаҡты сайҡатыу файҙалы.

❖ Тамаҡ шешкәндә күп һөйләшмәҫкә, йылы сәйҙе, минераль һыуҙы күберәк эсергә кәрәк.

❖ Тауыш бөтһә, ер сәтләүегеен (арахис) бешереп, һыуынан табала ҡыҙҙырып ашарға. Тауыш ҡарлыҡһа торғанда ла файҙалы.

❖ Тигеҙ өлөштә бал, спирт, гәрсис, он, үҫемлек майы, һыу алырға (бер компресс өсөн 1-әр ҡалаҡ етә). Бар компоненттарҙы ҡушып болғатырға, марля йәки башҡа берәй йомшаҡ туҡымаға һалырға. Аҫҡы яңаҡтың аҫтына бәйләргә. Компресты һалыр алдынан тирене үҫемлек майы менән майлау яҡшы. Полиэтилен менән ҡаплап, шарф менән урап ҡуйырға. 1 сәғәттән 4 сәғәткә тиклем тоторға кәрәк.

❖ 2 ҡалаҡ бал, 1 ҡалаҡ ваҡ итеп туралған алоэ, 3 ҡалаҡ араҡыны бергә ҡушып болғатырға, марляға һалырға, шулай уҡ аҫҡы яңаҡҡа бәйләргә. Көнөнә бер нисә тапҡыр алыштырырға, өлкәндәр компресты төнгәлеккә ҡалдыра ала.

❖ Баллап һөтлә ҡара сәй эсеү йүткереүҙән һаҡлай. Шулай ҙа йүткереү барлыҡҡа килгән икән, 1 өлөш ҡайын һутына 1 өлөш һөт ҡушып эсеп дауаларға мөмкин.

❖ Ангина сыҡһа, тамаҡты каланхоэ һутына шул уҡ күләмдә өҫтәлгән һыу менән сайҡатырға.

❖ Ангина менән ауырығанда көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр балғалаҡ һуған һуты эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ЙОРТОҒОҘҘАН АҠ КИТМӘҺЕН

**Малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе халыҡтарҙа һөт изге ризыҡ иҫәпләнә. Һөттө күп бирә, тип, һыйырҙы йәки бейәне маҡтарға ярамай, уларға күҙ тейеүе ихтимал, тигән ышаныу бөгөн дә йәшәй.**

Әгәр ҙә һыйырҙы һауғанда һөт менән бергә ҡан һауылһа, был һөттө көмөш йәки алтын йөҙөк аша үткәргәндәр. Һөттө ябыҡ һауытта һаҡлайҙар, күҙ тейеүҙән, яуыз күстәрҙән һаҡлау өсөн биҙрәгә ҡыҙыл төҫтәге таҫма йәки еп бәйләү йолаһы ла бар. Һөттө түгергә, сайпылып киткән һөткә баҫырға ярамай, ҡымыҙ йәки һөттө һауытҡа ҡойғанда ҡысҡырып һөйләшеү, һауыт-һаба шалтыратыу ҙа тыйылған, юғиһә, ғаиләгә бәлә килеүе мөмкин. Ошондай уҡ тыйыуҙар башҡа халыҡтарҙа ла осрай, мәҫәлән, һөт түгелеп китһә, монголдар уға бармаҡты еүешләп, уң яурынға йәки маңлайға һөртөргә кәрәк, тип иҫәпләй, сөнки өс төрлө ризыҡ - һөт, ҡымыҙ, эремсек кешегә бәхет килтерә.

Башҡорттарҙа ҡояш байығас, йорттан аҡ китмәһен өсөн, өйҙән һөт ризыҡтары алып сығыу тыйылған. Бик кәрәк булһа, "Бисмилла!" тип, тупһа аша сыҡҡанда һөткә күмер киҫәге, шырпы, һалам һалғандар. Был әйберҙәр йорттоң усағын сағылдырыусы булараҡ, һаҡсы ролен үтәгән.

Ҡараңғы төшкәс, һыуға барыу ҙа тыйылған. Шулай ҙа был тыйыуҙы боҙорға тура килһә, ҡоҙоҡҡа килгәс, сәбәбен аңлатыу кәрәк (ҡунаҡ килде, дауаланыу өсөн һ.б.). Ҡараңғыла ашау ҙа рөхсәт ителмәй.

Кемгәлер һөт бирергә тура килһә, шул һөттән үҙҙәренә лә ҡойоп алып ҡалалар. Һөт ярҙамында яуызлыҡ менән көрәшергә була, тип иҫәпләнгән, шуға ла йортҡа ингән һәр кешегә һөт, ҡымыҙ тәҡдим иткәндәр, шуның менән уның яуыз ниәттәрен еңгәндәр. Йәшен атыу һөҙөмтәһендә башланған янғынды әсегән һөт менән генә һүндереп була тигән ышаныу ҙа бар. Йәшенле йәйҙә малға зыян килмәһен өсөн уларҙың маңлайҙарын аҡ май менән майлайҙар. Аҙбар башына элеп ҡуйылған, йорт малы ҡотон һаҡлап тороусы баш һөйәген дә май менән майлап торғандар. Әгәр ҙә табынға ҡуйылған майҙы тәмләп ҡарамаһаң, май "үпкәләп": "Минең кеүек һарғайып ултыр", - тип әйтә, ти.

Ҡымыҙ ҙа изге эсемлек иҫәпләнгән. Бай йортона ингән ярлы кеше иң тәүҙә ҡымыҙ тәпәне эргәһенә барып, ҡымыҙҙы бешә алған. Бының менән ул хужаның йортона муллыҡ теләүен белдергән. Һуңынан хужа уны ҡымыҙ менән һыйлаған. Ҡымыҙҙы ағас һауытҡа һалғандар, шул саҡта уның бәрәкәте китмәй. Ағас тәпәндәге ҡымыҙҙы ағас ижау менән алғандар, ағас туҫтаҡтарға ҡойоп, ҡунаҡтарҙы һыйлағандар. Туҫтаҡтың төбөндә бер нисә тамсы ҡымыҙ ҡалдырып, уны тирә-яҡҡа һибеп ҡуйыу йолаһы булған. Ҡыҙҙы атай йортонан оҙатҡанда уға аҡ бәхет теләп, һөт һипкәндәр. Кейәү йортонда киленде һөт, май, бал менән ҡаршылағандар.

Ыуыҙ һөтөнән әҙерләнгән ризыҡ та йола аштары иҫәбенән. Ыуыҙ ашын ғаилә эсендә генә ашау гонаһ иҫәпләнгән. Мал хәйере тип йөрөлгән был йола мәлендә һөттө өлкәндәргә һәм балаларға эсергәндәр, сөнки уның составындағы файҙалы матдәләр улар өсөн файҙалы. Әгәр ҙә ыуыҙ һөтөн башлап малайға эсерһәң, киләһе йылда һыйырҙың быҙауы - үгеҙ, ә ҡыҙға эсерһәң, орғасы була, тип ышанғандар. Яңы тыуған быҙауҙы мейестең ауыҙына килтереп: "Мейестәй, мөрйәләй ҙур бул", - тип бер нисә тапҡыр әйткәндәр һәм һөт имеҙгәндәр.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

# АУЫЛДАРЫБЫҘҘАҒЫ...

## иң кәрәкле кешеләр улар



**(Башы 1-се биттә).**

### Йолаһыҙ ил булмаҫ

Замана артынан ҡыуып, көнсығыш илдәренә оҡшарға тырышып, балаларыбыҙҙы үҙ асылынан ситләштереп тәрбиәләүҙең әсе емештәрен татып йәшәлгән көндәр бөгөн. Ата-бабаларыбыҙҙың изге мираҫ итеп быуындан-быуынға күсерелә килгән йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, рухи тәрбиәһен иҫкелек ҡалдығы тип һанап, унан йөҙ бороуҙың һөҙөмтәһен күреп, терһәктәрҙе тешләр хәлгә еткәнбеҙ кеүек. Эскелек, әхлаҡһыҙлыҡ, тәрбиәһеҙлек, рухи көсһөҙлөк кеүек донъя афәттәренә дусар ителгән балаларыбыҙҙы күргәс кенә ниндәй аянысыл хәлгә ҡалыуыбыҙ тураһында уйлана башланыҡ. Башҡортҡа аҡыл һуң төшә, һуң төшһә лә мул төшә, тиҙәр бит әле. Ниһәйәт, ауылдарыбыҙҙағы рухи төшөнкөлөккә, эскелеккә ҡаршы көрәшеүҙе, тәрбиә мәсьәләләрен хәл итеүҙе бөгөн ағинәйҙәребеҙ үҙ ҡулдарына алды.

Тормошобоҙҙо яҡшыртыу, киләсәгебеҙҙе хәстәрләү буйынса өҫтән төшөрөлгән күрһәтмәләрҙе, ҡарарҙарҙы ғына көтөп ятыуҙың файҙаһы булмауын аңлаған, иң мөһиме, битараф булмаған башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары үҙ йолаларыбыҙҙы тергеҙеү, йәштәрҙе милли ғөрөф-ғәҙәттәргә ярашлы тәрбиәләү, ауылдарҙағы башҡа төр социаль мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса эш башланы. Ике йыл эсендә матур башланғысты республикабыҙҙың 14 районы ҡатын-ҡыҙҙары дәррәү күтәреп алды, быйыл улар башҡарған эштәренә һығымта яһап, үҙ-ара тәжрибә уртаҡлашыу, фекер алышыу ниәтендә Әбйәлил районында ҡор йыйҙы.

Майҙан хужалары әбйәлилдәр әхирәттәрен ҡунаҡ итеп ҡаршыланы. Алыҫ араларҙы яҡынайтып килеүен килгәс, боронғо бер шөғөлөбөҙҙө күрһәтәйек, тип, Амангилде ауылы ағинәйҙәре башҡа төбәктәрҙә онотола төшкән тула баҫыу йолаһын хәтергә төшөрҙө. Баҡтиһәң, борон башҡорт ир-егеттәренең эш кейеме туланан - һарыҡ йөнөнән һуғып, баҫылған туҡыманан тегелгән икән. Был туҡыманы эшләү серен Амангилде ауылында йәшәүсе Ғәшүрә Әүбәкирова белә, ул боронғо шөғөлдө йөҙйәшәр әсәһенән отоп ҡалған. "Элек башҡорт ир-егеттәре кейеҙ кейем кеймәгән, уларҙың эш кейеме бына ошо туланан тегелгән сәкмән, сарыҡ, ойоҡ, башлыҡ булған. "Сәкмән кейгән ир-егеттең йортонда кәтмән була", тип юҡҡа ғына таҡмаҡ әйтелмәгән, мал табыусының өҫ кейеме булған ул тула сәкмән. Халыҡтың бер шөғөлө онотолмаһын тип, бөгөн бөтөн республика ағинәйҙәрен эштең айышына төшөндөрөп, күрһәтеп ҡалырға булдыҡ", - ти Ғәшүрә Зәйнулла ҡыҙы. Уның өйрәтеүенсә, тула баҫыу өсөн һарыҡтың көҙгө йөнөн ян ярҙамында иләп, уны сиратып, балаҫ һуғыу станогында иңен 25-30 см яҫылыҡта һуғырға кәрәк, оҙонлоғо күпме булһа ла ярай. Шуны ҡайнап торған һыуға биш минутҡа һалып алып, кейеҙ кеүек таяҡҡа урап тигеҙләп баҫырға кәрәк. Оҫтабикә әйтеүенсә, ҡара тирең сыҡҡансы баҫһаң, туланы бесеп кейем теккәндә ул һүтелмәй ҙә, тарҡалмай ҙа. Баҫып бөткәс, туланы тигеҙ итеп элеп, осона ауырлыҡ һалып киптерергә. Кипкән туланы элеүле торған көйө йөнө ҡалҡһын өсөн туҡмарға кәрәк. Әҙерлеге еткән тула туҡыманан йылы ла, тәнде тын алдырырлыҡ та, эшкә кейерлек кейеҙ кеүек туҙмаҫ кейем-һалым тегеп алырға ғына ҡала.

Халыҡ күңелендә йыр-таҡмаҡтарҙа ғына һаҡланып ҡалған тула баҫыу шөғөлөн ҡарап, ата-бабаларыбыҙҙың ни тиклем егәрле, дәртле булыуын аңлайһың. Бер сәкмәнде тегеү өсөн генә лә ҡатындарҙың әллә күпме күҙ нурын һалып, ҡул көсөн түгеп, шул тиклем ҡатмарлы эште башҡарып ултырыуы талап ителгән. Ә шулай ҙа уйынлы-ысынлы таҡмаҡ һүҙҙәрендә эштең ҡыйынлығы тураһында бер һүҙ әйтелмәй, зарланыу ҙа юҡ: "Тула, тула, тула, тула, Туланан сәкмән була, Өҫтөң бөтөн, тамағың туҡ, Әйҙә тула ла тула", - тип, йырлана ул. Шөкөр, тигән көнө булған шул ата-бабаларыбыҙҙың. Ана шул башҡорттарҙы борон-борондан үҙҙәре йәшәгән ерҙең тәбиғәтенә, ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтарына, Хоҙай биргән башҡа төр етешлектәргә һаҡсыл ҡарашлы иткәндер ҙә. Бөгөн беҙ йолаларыбыҙ менән бергә ошо сифатыбыҙҙы ла юғалттыҡ кеүек. Әммә ил йолаһыҙ булмай, халыҡ хәтерһеҙ булырға тейеш түгел. Ағинәйҙәрҙең тырышлығы, матур башланғысы киләсәктә үҙ һөҙөмтәләрен бирер, моғайын.

### Аҡыл төбө - тәжрибә

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева кәңәш ҡорон асып, ағинәйҙәр хәрәкәте бурыстарына бер аҙ байҡау яһаны: "Ауылдарға ябырылған заман касафаттары бихисап булып китте. Улар сылбырҙай теҙелеп, бер-бер артлы килеп һөҙөмтәләр теҙмәһен хасил итә тора: эшһеҙлек арҡаһында йәштәрҙең - ҡалаларға, хеҙмәт йәшендәге ир-егеттәрҙең Себер тарафтарына юлланыуы тыуым кәмеүгә, шунан мәктәптәр ябылыуға булышлыҡ итә, битарафлыҡ, нәҫ баҫа, рухи көрсөк алҡымдан алып бара. Ошондай сәбәптәр бөлдөрә бөгөн ауылдарыбыҙҙы. Кем ҡотҡарыр? Әлбиттә, ошо ауылда йәшәгәндәр үҙҙәре генә эшләй ала быны. Шуға ла Бөтөн донъя башҡорттары ошондай бурыс ҡуя ла инде: территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары ойоштороп, ауылда хужа булырға! Ә бындай үҙидаралыҡты ойоштороу иң тәүҙә ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар иңендә. Улар донъяларыбыҙҙың алға бармауын нығыраҡ тоя, уны төҙәтер өсөн ең һыҙғанырға, ни ҙә булһа эшләргә әҙер тора, тип уйланылды. Хәҙер Рәсәй Президенты ауыҙынан да гражданлыҡ йәмғиәте, гражданлыҡ институты тигән һүҙ бик йыш яңғырай бит. Ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар ҡорҙары, урындарҙағы башҡорттар ҡоролтайҙары - шул уҡ гражданлыҡ йәмғиәте бит инде ул. Был ойошмалар башҡа йәмәғәт ойошмалары кеүек, кәрәк саҡта ғына йыйылып, ниндәйҙер бер сара үткәреп алыу өсөн тәғәйенләнмәгән. Был ойошмалар - асылда йәмғиәт ул. Был ошо ерҙә үҙен хужа итеп тойған, бер нәмәгә лә битараф булмаған халҡыбыҙҙың йәшәү рәүеше. Бына шул хужа булыу тойғоһон уятыу эшенә егелгән дә инде беҙҙең "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы".

Ошо йүнәлештә әүҙем эшләүсе Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Учалы, Йылайыр, Хәйбулла райондары, Сибай ҡалаһы ағинәйҙәр хәрәкәтен билдәләп үтте Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы һәм уларҙы ошо ҡорҙа үҙ тәжрибәләре менән уртаҡлашырға саҡырҙы. Иң тәүҙә Әбйәлил ағинәйҙәре телмәр тотто. "Баш ағинәй итеп тәғәйенләнгәс тә райондағы бөтөн ауыл биләмәләрен йөрөп сығып, урындарҙа ағинәйҙәр ойошмаһында эшләрлек ҡатын-ҡыҙҙар менән осрашып, һөйләшеп сыҡтым. Бөгөн беҙ бөтә йәмәғәт ойошмалары кеүек, үҙебеҙҙең план, рәсми эш ҡағыҙҙарына таянып, башҡарған эштәр буйынса отчеттар яҙып барабыҙ. Төп бурысыбыҙ - йәштәрҙе тәрбиәләү. Шуға күрә, балалар баҡсаһына, мәктәптәргә барып, тәрбиәүи лекциялар һөйләйбеҙ, балалар өсөн төрлө саралар үткәреп торабыҙ. Донъя афәтенә әйләнгән эскелектән ауылдаштарҙы арындырыу буйынса ла ағинәйҙәр әүҙем эшләй", - тип һөйләп китте Әбйәлил районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Роза Таһирова. Билдәләнеүенсә, Әбйәлил ағинәйҙәре ауылдарҙағы бихисап проблемаларҙың һәр береһенә иғтибар биреп, эштәрҙе үҙ-ара бүлеп алып башҡара. Ауылда эшһеҙлектән ялҡып, тормош һынауҙарын күтәрә алмай, хәмер ҡолона әүерелеп киткән ғаиләләр менән өс төрлө эш алып баралар: эскән ғаилә, эскән ҡатын, эскән ир - һәр кемгә индивидуаль ҡараш. Ағинәйҙәрҙең күҙ уңынан бер генә мәсьәлә лә ситтә ятып ҡалмай, хатта мөхәббәт эшендә лә улар кәңәш-төңәш итә. Оло йәшкә тиклем өйләнмәй, буйҙаҡ йөрөгән ир-егеттәрҙе башлы-күҙле итеүҙе лә үҙ ҡулдарына алғандар. Ошо ярты йыл эсендә бер Таштимер ауыл биләмәһендә генә өс буйҙаҡҡа хәләл ефет табып бирергә өлгөргән улар. Амангилде ауылы ағинәйҙәре эшен халыҡ күңеленә иман нуры сәсеүҙән, ауылдаштарҙы мәсеткә йыйыуҙан башлаған.

**(Дауамы 11-се биттә).**

✓ Әммә ҡыҙ төрлөсә тартҡылаша, атаһы йәки ағалары уға нимәлер бүләк итмәйенсә, өйҙән сыҡмай. Әхирәттәре кәләш ауылдан сығып киткәнсе сеңләп оҙата. Кейәү иң алдан һыбай бара.



ХӘҠИҠӘТ ШУЛАЙ

**Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Үҙәк тарих архивы август айында үҙенең 95 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Ошо уңай менән архив хеҙмәткәре Зөфәр Ғәбит улы ҒӘТИӘТУЛЛИН ойошманың тарихы, әһәмиәте, бөгөнгө көндәге эшмәкәрлеге менән таныштырыуҙы дауам итә.**

# ҮҘӘК АРХИВ...

## боронғолоҡ һағында



### Тарихсылар һәм архив

Тарихсылар архивта даими эшләй, әммә артыҡ әүҙемлек күрһәтәләр, тип әйтмәҫ инем. Ғалимдар ҡулы теймәгән өлкәләр етерлек әле. Ни өсөн айырым темалар ситтә тороп ҡала? Быға, моғайын, юғары уҡыу йорттарында алып барылған йүнәлеш һуңғы роль уйнамай ҡалмайҙыр. Сөнки профессорҙар, юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары студенттарға, аспиранттарға ниндәйҙер яңы теманы түгел, ә үҙҙәре тикшергән өлкәне тәрәнерәк өйрәнеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Шул сәбәпле бер урында тапаныу килеп сыға, тикшеренеүҙәр даирәһен киңәйтеү күренмәй. Әлеге ваҡытта тарихты өйрәнеү башлыса урта быуаттарға ҡайтып ҡала. Әйтеүемсә, был осор беҙҙең архивтарҙа һаҡланмай, һөҙөмтәлә студенттар һәм аспиранттар Мәскәүгә барып эшләргә мәжбүр була. Әлбиттә, ул осорҙо ла өйрәнергә кәрәк, хатта тәрән өйрәнергә кәрәк, әммә яҡыныраҡ булған осор хаҡында ла онотorға ярамай. XIX быуатҡа тарихсыларҙың ҡулы әҙ тейә. 1800 йылдарҙан һуң, кантонлыҡ заманында, крепостнойлыҡ булған осорҙа һәм ул бөтөрөлгәс халыҡтың нисек йәшәгәне, уның көнкүреше ғалимдарҙы аҙыраҡ ҡыҙыҡһындыра. Эйе, дөйөм рәүештә ул осорға тарих фәне аша һүрәтләмә бирелгән, ә ентекле рәүештә тикшеренеүҙәр әлегә башҡарылмаған. Ә был осор беҙҙең архивта бик яҡшы сағылдырыла.

### Һуғыш темаһы

Һуңғы ваҡытта һуғыш темаһы ныҡлап өйрәнелә. Быға бер-бер артлы килгән тарихи ваҡиғаларҙың юбилейҙары йоғонто яһай. Мәҫәлән, ике йыл элек француздарға ҡаршы Ватан һуғышы башланыуға - 200 йыл, былтыр Парижды яулауға - 200 йыл, быйыл Беренсе Донъя һуғышының башланыуына 100 йыл тулды. Ошо юбилей даталары уңайы менән ҙур ғилми эштәр яҙылды. Икенсенән, беҙҙең ил етәкселеге тарафынан да хәрби-патриотик тәрбиәгә ҙур иғтибар бирелә башланы. Был кәрәкле эш, сөнки ҡасандыр ватансылыҡ тәрбиәһен ҡулдан ысҡындырғайныҡ, шул сәбәпле маңҡорттар күбәйҙе. Бөйөк Ватан һуғышында немецтар еңһә, яҡшыраҡ булыр ине, тип асыҡтан асыҡ әйтә башланы ҡайһы берәүҙәр. Ошо насар тенденцияларҙы бөтөрөү маҡсатында тарихсыларға ла ошондай йүнәлеш бирелде.

Был эштә мин дә ҡатнаштым, "Ватандаш" журналында мәҡәләләрем сыҡты. 2012 йылда француздар менән һуғышҡа 200 йыл тулыуға арналған йыйынтыҡҡа һуғышта үлеүселәрҙең исемлеген әҙерләгәйнек. Шул мәғлүмәттәр нигеҙендә тағы бер йыйынтыҡ сығарырбыҙ, тип уйлағайныҡ. Ләкин финанс ҡыйынлыҡтар килеп сығыу сәбәпле, быны тормошҡа ашырып булманы. Китапҡа инмәгән материалдарымды журналда баҫтырып сығарҙым.

Башҡорт тарихы хаҡында әйткәндә лә һуғыш темаһы ғәйәт ҙур урынды алып тора. Бигерәк тә тарих буйынса мәктәп программаһында ихтилалдарға, сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы походтарға ҙур урын бирелә. Бер яҡтан, был халҡыбыҙҙың батырлығы өсөн ғорурлыҡ уятһа, икенсе яҡтан, беҙҙең халыҡҡа кире ҡарашлы булған кешеләргә көс өҫтәүе лә мөмкин. Бына һеҙҙең мәғарифығыҙ ҙа, мәҙәниәтегеҙ ҙә, иҡтисадығыҙ ҙа булмаған, һеҙ һуғышып тик йөрөгәнһегеҙ, тип әйтеүҙәрен дә ишеткеләйбеҙ бит. Шуға ла уҡыу әсбаптарын да төрләндереү, күберәк темаларҙы яҡтыртыу кәрәктер.

Һуғыш темаһынан башҡа өлкәләр насар өйрәнелгән, тип әйтеп булмай, әлбиттә. Мәғариф темаһы буйынса бер нисә кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертацияһы яҙылды, монографиялар сыҡты. Әле яңыраҡ баҫылып сыҡҡан ете томлыҡ "Башҡорт халҡының тарихы" кеүек йыйынтыҡтар бик яҡшы күренеш, тип уйлайым. Сөнки бында халҡыбыҙҙың тарихы киң сағылыш таба. Ошондай уҡ формала мәғарифты, мәҙәниәтте, иҡтисадты күрһәткән, хөкүмәт тарафынан финансланған хеҙмәттәр ҙә күберәк булһа ине.

### Башҡа архивтар менән бәйләнеш

Башҡа архивтар менән бәйләнеш күберәк тарихсыларҙың эше булырға тейеш. Беҙҙең төп эшебеҙ - документтарҙы һаҡлау. Әммә мөмкин булған тиклем икенсе ҡалаларҙа урынлашҡан архивтар менән дә бәйләнеш тоторға тырышабыҙ. Төрлө конференцияларға әҙерләнгәндә, мәҡәлә, хеҙмәттәр яҙғанда уларға мөрәжәғәт итәбеҙ. Ләкин барыһы ла һаман да шул финанс мәсьәләһенә барып тоташа. Документтарҙың күсермәһен эшләү өсөн дә, икенсе ҡалаға барыу, унда йәшәү өсөн дә аҡса кәрәк. Әллә ҡайҙа йөрөп, архив документы эҙләү үҙе үк мәшәҡәтле эш. Мәскәүҙә мәҫәлән, архивтарҙан кәрәкле документты алыу өсөн ике көн көтөргә кәрәк. Етмәһә, ҡулға 5-тән күберәк документ бирмәйҙәр. Бәлки, архив бюджетына башҡа ҡалаларҙағы архивтарҙан Башҡортостанға, башҡорттарға ҡағылышлы документтарҙың күсермәһен эшләү өсөн сығымдар һалынһа, бик күп ҡиммәтле тарихи сығанаҡтар үҙебеҙҙә булыр ине, бик күп хеҙмәттәр яҙылыр ине.

### Башҡорт ауылдарының йәше

Ауылдарға тәүге ревизиялар 1719 йылда үткәрелә башлай, ләкин тәүге дүртәүһендә башҡорттар иҫәпкә алынмай. Беренсе тапҡыр улар 1795 йылдағы ревизияла теркәлә. Бөгөнгө көндә шәжәрә байрамдары киң танылыу яулай. Республиканың төрлө районларынан крайҙы өйрәнеүселәр килеп, үҙҙәренең ауылдары хаҡында мәғлүмәт туплайҙар. Йыш ҡына миңә, ауылыбыҙҙың йәшен белге килә, тип әйткәндәрен ишетергә тура килә. Шулай тип әйтеүселәргә мин һәр саҡ, башҡорт ауылдарының төҙөлгән йылын архивта тапмаясаҡһығыҙ, улар боронғо, тип яуаплайым. Татар, мишәр, урыҫ ауылдарының нигеҙ һалыныуы тураһында мәғлүмәттәр бар, сөнки улар һуңынан күсеп килгәндәр. Бары төп ауылдан йәйләү еренә күсеп ултырған башҡорт ауылдарының йәше тураһында ғына телгә алыныуы мөмкин. Ләкин ул осраҡта ла был ауылдың ниндәй ауылдан күсеп сыҡҡаны күрһәтелә. Шуға ла крайҙы өйрәнеүселәр ревизияла телгә алынған мәғлүмәттәргә генә таянып, ауылдарын "йәшәртеп" ебәрмәһә ине.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ**
**яҙып алды.**
**(Аҙағы. Башы 36, 37-се һандарҙа).**

ЯҢЫ КИТАП

## "БАШҠОРТОСТАН ХАЛЫҠТАРЫ" ЭНЦИКЛОПЕДИЯҺЫ




**Ошо көндәрҙә "Башҡортостан энциклопедияһы" фәнни-нәшриәт комплексында өс мең тираж менән рус телендә нәшер ителгән "Башҡортостан халыҡтары" бер томлыҡ энциклопедияһының исем туйы уҙҙы. Уны сығарыуға "Урал" хәйриә фонды матди ярҙам күрһәткән.**

Баҫмала башҡорттар һәм Башҡортостанда йәшәүсе 27 халыҡ вәкиле тураһында ентекле мәғлүмәттәр, Башҡортостан Республикаһының тәбиғәт шарттары, милли составы, милли сәйәсәте тураһында белешмәләр, Башҡортостанда этнология, фольклористика фәндәре үҫеше тураһында мәҡәләләр һәм башҡа ҡыҙыҡлы, файҙалы белешмәләр бар. Йыйынтыҡҡа 570 фотоһүрәт, тиҫтәләгән боронғо һәм хәҙерге карта, 2002, 2010 йылдарҙағы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы һөҙөмтәләре индерелгән. Энциклопедия өс тиҫтәнән артыҡ авторҙың күп йыллыҡ эҙләнеүҙәре, фәнни хеҙмәттәре нигеҙендә төҙөлгән. Баш мөхәррире Фирҙәүес Хисамитдинова әйтеүенсә, баҫмаға тәҡдим ителгән һәр мәҡәлә, һәр фекер ваҡыт һәм ҡыҙыу-ҡыҙыу фекер алышыуҙар һынауы үткән булыуы менән ҡиммәтле. Беҙҙеңсә, китаптың өҫтөнлөктәре бихисап: иң ҙур уңышы - теге йәки был халыҡ тураһында, шулай уҡ башҡорттар тураһында берәй мәғлүмәт кәрәккән саҡта, уны ошо китаптан табыуы еп-еңел.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР

### Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Күп авторҙар, ҡалым тулыһынса түләнеп бөткәнгә һәм йәш кәләш ире йортона күсеп барғанға тиклем иренә үҙенең йөҙөн күрһәтмәҫкә тейеш һәм быны уның әсәһе йәки оло бер ҡатын-ҡыҙ күҙәтеп тора, әгәр кейәү шуға тиклем кәләшенең йөҙөн күрһә, был мәсхәрә һанала, тип раҫлай. Ҡағиҙә булараҡ, бындай ғәҙәт XX быуат башында ла йәшәй, әммә ул бөтөнләй үтәлмәй, һәм кейәү, әгәр быға тиклем таныш булмаһа, беренсе килеүендә үк кәләше менән таныша. Кейәүләп йөрөү, йәғни ҡалымды тулыһынса түләп бөтөү ҡайһы берҙә бик оҙаҡҡа һуҙыла һәм был ваҡытта йәш ғаиләнең балаһы ла тыуып өлгөрә. Бала, әсәһе атаһының өйөнә күсеп барғанға тиклем өләсәһе тәрбиәһендә үҫә.

Ҡалымды тулыһынса түләп бөткәс, кейәү туғандары менән ҡайныһы йортона кәләше артынан юллана. Уның килеүенә ҡайныһы, әгәр тейешенсә бай булһа, туй ойоштора. Әгәр ярлы булһа, ике яҡтың туғандары менән генә һый табыны уҙғара.

Туй ике-өс көн дауам итә һәм иртәнән кискә тиклем бара. Унда ҡымыҙ, сәй эсәләр, бишбармаҡ ашайҙар, бейейҙәр, күңел асалар һ.б. Бай туйҙарҙа бәйге һәм көрәш ойоштороla. Был көндәрҙә бик күп саҡырылған һәм саҡырылмаған ҡунаҡтар йыйыла һәм улар тантаналарҙа һәм һыйланыуҙа ҡатнаша. Ошо уҡ көндә ҡоҙасалар һаба, йәғни ауыл буйлап йөрөп сәй, шәкәр, ит, ҡымыҙ һ.б. аҙыҡ-түлек йыя. Һуңынан уларҙы бешереп, бер буш өйҙә табын әҙерләп, йыйылған ҡунаҡтарҙы һыйлай. Ваҡыт йыр-бейеү, ҡурай моңо аҫтында һиҙелмәй ҙә үтә.

Ниһайәт, йәштәрҙең китер көнө етә. Ҡыҙҙың әхирәттәре һәм ҡатын-ҡыҙ туғандары, уны ебәргеләре килмәйенсә, төрлө кәртәләр ҡора. Улар кәләштең түшәк-ҡаралтыһын урманға алып барып, уны алданырлыҡ итеп сырмалтып бәйләп, ептең осон ағас тамырына йәшереп, кәләштең үҙен түшәк өҫтөнә ултыртып ҡуялар. Кейәү килеп тапҡас, уның ҡатын-ҡыҙ туғандары менән кәләштең ҡатын-ҡыҙ туғандары, әхирәттәре араһында көрәш-алыш башлана. Ҡайһы бер ваҡыт бындай алышҡа шул тиклем бирелеп китәләр һәм ул ике яҡҡа ла бер ни тиклем зыян килтерә - әйберҙәр йыртыла. Әммә кейәү был сығымдарҙы бүләктәр биреп ҡаплай. Ҡатын-ҡыҙҙар бауҙы сискәс, кәләш уларҙыҡы иҫәпләнә һәм кейәү бауҙы һатып алырға тейеш була. Күсеп китер алдынан кәләш туғандары менән хушлаша. Ул әхирәттәре уртаһында ҡала, дүрт ҡыҙ уның баш өҫтөнән ҙур яулыҡты дүрт мөйөшөнән тотоп йөрөтә, башҡалары сеңләй. Кәләш һәр ҡыҙ туғанының эргәһенә килеп, уларға таҫтамал, эскәтер, туҡыма киҫәге, ептәр һ.б. бүләк итә. Ҡыҙ туғандары уға кем нимә бирә ала, шулай бәхилләй: кем мал әйтә, кем аҡса бирә, кем туҡыма. Был туҡыма - йыртыш кәләштең баш кейеменә теркәлеп ҡуйыла һәм ул аҙаҡҡа тиклем баштан-аяҡ туҡыма аҫтында ҡала. Һуңынан әхирәттәре уны, иң матур кейемдәрен кейҙереп, ултырып китәсәк арба эргәһенә килтерә. Әммә ҡыҙ төрлөсә тартҡылаша, атаһы йәки ағалары уға нимәлер бүләк итмәйенсә, өйҙән сыҡмай. Әхирәттәре кәләш ауылдан сығып киткәнсе сеңләп оҙата. Кейәү иң алдан һыбай бара.

*✓ Шарап эшләүселәр хатта, алкоголь ҡулланыу, көнөнә бер стакан, йәғни 250 грамм араҡы эсеү зыянлы түгел, тип раҫларға тейеш булған тикшеренеүҙәр өсөн күп аҡса бүлеп, уны фәнни нигеҙләп ҡуйырға тырыша.*

**Тарихыбыҙҙы беләбеҙме? Хәҡиҡәттә кемдәр үҙенең мәнфәғәттәрендә үҙгәртеүен һәр саҡ күҙ уңында тотабыҙмы? Бөгөн илебеҙҙә йөҙҙәрсә мең кешенең яҙмышын ҡыйратҡан һәм әле лә ошо эшен дауам иткән, халҡыбыҙҙы үлемгә этәргән "йәшел йылан" алдағын фашларға көсөбөҙ етәсәкме? "Беҙ быны булдыра аласаҡбыҙ!" ти бөгөн ошо "йәшел йылан" афәтенә ҡаршы көрәшеүсе "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы ағзалары. Тап улар "Айыҡ ауыл - 2014" республика конкурсында ҡатнашыусы ауылдар вәкилдәре йыйылған семинарҙа күрһәтте ошо "Бер алдаҡ тарихы" тигән документаль фильмды. Ә беҙ ул фильмдың йөкмәткеһен аҡ ҡағыҙ битенә күсерҙек.**

# БЕР АЛДАҠ

## Һыуҙың араҡыға әйләнгәне

Тарихтан күренеүенсә, рустарға эскелек хас түгел. "Рус араҡыһы"н бөтөнләй рустар уйлап сығармаған. Борондан Рәсәйҙә "водка" тип шифалы үләндәрҙең һыуҙағы төнәтмәһен атағандар. Тап һыу (вода) һүҙенән "водка" атамаһы таралған. Сит ил сауҙагәрҙәре йөҙөм спиртын һатыу өсөн ошо атаманы файҙаланған. XVI быуатта Генуя сауҙагәрҙәре беренсе тапҡыр Рәсәйгә йөҙөм спирты килтерә. Рустарҙың, сит ерҙән килгән эсемлекте ҡулланыу мөмкин түгел, тигәненә уларҙың аптырауының сиге булмай. Әммә сауҙагәрҙәр айыҡ илдә үҙ тауарын нисек тә һатыу өсөн уны, шифалы төнәтмә, тип тәҡдим итә башлайҙар. Ул саҡта Рәсәйҙә, Европанан айырмалы, айыҡ тормош рәүеше алып баралар, ҡатылығы 2-3 проценттан артмаған бал йәки кеүәҫ кенә ҡулланалар, уларҙы ла бик һирәк эсәләр. Ул ваҡыттағы Рәсәй хаҡында сәйәхәтсе Самуэль Маскевич бына нимә ти: "Москвитяндар бөйөк айыҡлыҡҡа эйә һәм быны вельможаларҙан да, халыҡтан да ҡәтғи талап итәләр. Бер ҡайҙа ла шарап та, һыра ла һатып алыу мөмкин түгел. Ҡайһы берәүҙәр шарап мискәһен мейескә оҫта итеп йәшереп маташа, әммә гәйеплеләрҙе тиҙ табалар. Иҫеректе шунда уҡ махсус улар өсөн эшләнгән "бал төрмәһе"нә ("бражная тюрьма") ябалар; бары тик бер-нисә көндән, кемдәндер юлламаһы буйынса ғына азат итәләр. Икенсе тапҡыр эсеп тотолоусыларҙы төрмәгә оҙаҡҡа бикләйҙәр, һуңынан урам буйлап йөрөтөп, эскелек ерәнеү тойғоһо тыуҙырғанғаса ҡамсы менән һуҡтыралар".

XVIII быуат башына тиклем ябай халыҡҡа алкоголдә ҡалала берәү генә булған ҡабаҡтарҙа һаталар. Халыҡ араһында эскелек оят тип һанала. XVIII быуаттан башлап йылап ҡына эскелек урындары арта бара һәм XIX быуат уртаһына йән башына алкоголь ҡулланыу күләме 4 литрға етә. Алкоголь ил өсөн хәүеф тыуҙыра. Халыҡты эсереүгә ҡаршы сығыштар фетнәгә әүерелә. 1858 йылда Рәсәйҙең 32 губернаһында алкоголгә ҡаршы сығыштар башланып, уларҙа ҡатнашыусылар эскелек ойошторған урындарҙы ҡыйрата. Ауыл һәм ҡала халҡы, эсмәскә, тип ант итә һәм эске сауҙаһын ябыуҙы даулай. Быға яуап рәүешендә сауҙагәрҙәр алкоголгә хаҡты төшөрә, хатта бушлай араҡы тарата башлай. Әммә сыуалыштар йышая. Хөкүмәт баш күтәреүселәрҙе баҫтырырға ғәскәр һәм полиция хеҙмәткәрҙәрен ебәрергә мәжбүр була. Һәҙәмтәлә 11 меңдән ашыу крәҫтиән төрмәгә ябыла.

## Айыҡлыҡ хәрәкәте

Александр Икенсе спиртлы эсемлектәрҙе һатыуҙы сикләргә ҡарар итә. Һөҙөмтәлә алкоголь ҡулланыу йылына йән башына ике литрға тиклем кәмей. Рәсәйҙә 1885 йылда айыҡлыҡ хәрәкәтенең яңы тулҡыны ҡаплап ала. Беренсе айыҡлыҡ йәмғиәттәре төҙөлә. Уларҙың иң билдәлеһен бөйөк рус яҙыусыһы, айыҡлыҡҡа инаныусы Лев Николаевич Толстой етәкләй. Илдә спиртлы эсемлектәр ҡулланыу тураһында ул бына нимә тип яҙа: "Йәғошло сир кешеләрҙе үҙенә көндән-көн күберәк йәлеп итә: хәҙер инде ҡатын-ҡыҙҙар, йәш ҡыҙҙар, балалар эсә. Байҙарға ла, ярлыларға ла иҫерек йәки ҡызмаса булмайынса, күңел күтәрелмәгәндәй, үҙендең ҡайғыңды йәки ҡыуанысыңды аҡылыңды юйып, кеше сифаттарын юғалтып, хайуан дәрәжәһенә төшөп кенә бөтөрөп булғандай тойола..."

Шуныһы ҡыҙыҡ: ошондай хәлдәр күҙәтелеүгә ҡарамаҫтан, Рәсәй Европа илдәре араһында иң айыҡ булып ҡала. XIX быуат һуңында ғалимдар миҫал өсөн Европаның һәм АҠШ-тың иң ҙур илдәрен алып, йән башына тура килгән алкоголь күләме буйынса сағыштырыу үткәрә. Рәсәй, Францияны, Англияны, Германияны, АҠШ-ты һ.б. күпкә алға үткәреп, иң һуңғы урынды ала. 18 йәшкә тиклемге йәштәрҙең - 95, ҡатын-ҡыҙҙарҙың - 90 һәм ир-егеттәрҙең 47 проценты бөтөнләй алкоголь ҡулланмай, йәғни абсолют айыҡ була.

## "Иҫерек" бюджет

Яйлап алкоголлəштереү күтәрелә бара. 1913 йылға йән башына тура килгән алкоголь күләме 5 литрға етә. Матбуғатта һәм Дәүләт Думаһында бюджетты асыҡтан-асыҡ "иҫерек" тип атайҙар, ә власты халыҡты маҡсатлы рәүештә эсереүҙә гәйепләйҙәр. Эскелек милләт сәләмәтлегенә хәүеф менән янай башлай. Был осорҙа илдә тағы ла спиртлы эсемлектәрҙе һатыуға ҡәтғи сикләү индереүҙе талап иткән алкоголгә ҡаршы хәрәкәт киң ҡолас ала. Ил буйынса айыҡлыҡ йәмғиәттәре барлыҡҡа килә. Уларға шул ваҡыттың арҙаҡлы кешеләре: академиктар Павлов, Бехтерев, ғилми һәм ижади зыялылар вәкилдәре, крәҫтиәндәр һәм эшселәр инә. Әммә был хәрәкәттәргә ҡеүәтле көстәр ҡаршы сыға. 1911 йылда уҡ эре сәнәғәтсе барон Гинзбург асыҡтан-асыҡ: "Алкоголь һатыуҙан һәм ҡаҙнаның шарап кибеттәренән, спирт етештереү сәнәғәтенән мин үҙемдең алтын приискыларымдың барыһынан бергә алған тиклем килем алам. Шуға күрә эсемлектәрҙе ҡаҙна һатыуын нисек булһа ла һаҡларға һәм йәмәғәтселек фекере алдында аҡларға кәрәк", - тип белдерә.

Шарап эшләүселәр хатта, алкоголь ҡулланыу, көнөнә бер стакан, йәғни 250 грамм араҡы эсеү зыянлы түгел, тип раҫларға тейеш булған тикшеренеүҙәргә өсөн күп аҡса бүлеп, уны фәнни нигеҙләп ҡуйырға тырыша. Әммә ошо юл менән тикшеренеүҙәргә етди ғалимдарҙы йәлеп итеү уңышһыҙлыҡҡа дусар була. Академик Иван Павловҡа шундай тәҡдим килгәс, ул уға асыҡ хат менән яуап бирә: "Үҙ алдына алкоголь ҡулланыуҙың зыяны юҡлығын раҫлауҙы мәжбүри маҡсат итеп ҡуйыусы институттың "ғилми" тип аталырға хаҡы юҡ... Шуға күрә, кемгә дәүләт средстволары, халыҡ сәләмәтлеге, рус фәненең дәрәжәһе ҡәҙерле, улар ошо атамалы институттарға ҡаршы үҙ һүҙен әйтергә тейеш..."

## Николай Икенсенең "ҡоро" законы

Һөҙөмтәлә, Николай Икенсенең указы буйынса, 1914 йылда урындағы властар спиртлы эсемлектәрҙе етештереү һәм һатыуҙы тыйыу хоҡуғына эйә була. "Мин Рәсәйҙә мәңгелеккә дәүләт араҡыһын һатыуҙы көнәлгәре хәл итәм", - ти ул. Ошо указдан һуң йән башына ҡулланыу нулгә төшә - 0,2 литр булып ҡала. Ил өсөн был көтөлмәгән һөҙөмтә була. Бер йыл эсендә күҙәтелгән үҙгәрештәр хаҡында рус табибы Веденский былай тип яҙа: "Петроградта августа енәйәтселек - 20, Мәскәүҙә - 47, Тулала - 75, Костромала хатта 95 процентҡа кәмене. Үлтереш, имгәтеү кеүек енәйәтселек 60 процент самаһына ҡыҫҡарҙы. Сәнәғәттең барлыҡ тармаҡтарында, эреләрендә лә, бәләкәйҙәрендә лә, хеҙмәт етештереүсәнлеге 30 проценттан 60 процентҡаса күтәрелде".

1917 йылғы Октябрь инҡилабынан һуң "ҡоро" закон оҙайтыла. Әммә ялҡынлы революционер, Троцкий айыҡ кешенең донъя революцияһын яһамаясағын, ә ғаиләһе менән булышасағын, донъяһын рәтләүен яҡшы аңлай. Ғәмәлдә шулай була ла. Халыҡ яңы иҡтисади сәйәсәтте ҡыуанып ҡаршы ала һәм хужалыҡ менән шөғөләнә башлай. Шуға күрә, Лениндың үлеменән һуң, троцкистар ныҡышмалы рәүештә ҡоро законды бөтөрөргә тырыша башлай. 1925 йылдың 5 октябрендә Рыков шарап-араҡы һатыуҙы тергеҙеү тураһында указға ҡул ҡуя. Һәм һуғышҡа тиклем араҡы "Рыковка" тип аталып йөрөтөлә.

## Эскән кешенең аҡылы юйыла

Алкоголь ҡанға эләгеп, эритроциттарҙың - ҡыҙыл ҡан күҙәнәктәренең өҫтөн майһыҙландыра һәм улар тамырҙар буйлап берәмләп түгел, ә уҡмашып аға. Иң нескә тамырҙар - капиллярҙар баш мейеһенең күҙәнәктәрен - нейрондарҙы туҡландыра. Ә уҡмашҡан эритроциттар баш мейеһенең айырым тамырҙарына килеп еткәс, тамырҙар тығыла һәм ҡан артабан аҡмай, туктап ҡала. Кислород асығыуы кисергән мейе күҙәнәктәре үлә башлай. Кешенең иҫереү тороошо тап ошо мейенең айырым микроучасткаларының үлеүен раҫлай ҙа инде. Мейе күҙәнәктәре хатта ғүмер буйына ла тергеҙелмәй. Мәҫәлән, ике шешә һыра эскәндә 6,5 мең самаһы нейрон һәләк була һәм уларҙы ҡабат тергеҙеү мөмкин түгел. Шуға күрә, кешенең аҡылын юйҙыртыуҙа алкоголь - ҡеүәтле ҡорал. Санкт-Петербург Психо-невралгия институтына нигеҙ һалыусы бөйөк рус медигы, физиолог Владимир Михайлович Бехтерев: "Хатта аҙ күләмдәге алкоголдән дә аҡыл һәләтен кәметеүе раҫланған", - ти.

> *Алкоголь ҡанға эләгеп, эритроциттарҙың - ҡыҙыл ҡан күҙәнәктәренең өҫтөн майһыҙландыра һәм улар тамырҙар буйлап берәмләп түгел, ә уҡмашып аға. Иң нескә тамырҙар - капиллярҙар баш мейеһенең күҙәнәктәрен - нейрондарҙы туҡландыра. Ә уҡмашҡан эритроциттар баш мейеһенең айырым тамырҙарына килеп еткәс, тамырҙар тығыла һәм ҡан артабан аҡмай, туктап ҡала. Кислород асығыуы кисергән мейе күҙәнәктәре үлә башлай. Кешенең иҫереү торошо тап ошо мейенең айырым микроучасткаларының үлеүен раҫлай ҙа инде.*

Һуғыш алды йылдарында алкоголь ҡулланыу күләме йән башына ике литрға етә. Ә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ул ҡабаттан бер литрҙан да кәмерәк була. Рәсәйҙәге ҡоро законның тиҫтә йылы киләһе быуындар өсөн үҙенең бөйөк эшен башҡарып өлгөрә. Һуғыш йылдарында совет һалдаттары көс еткеһеҙ ауырлыҡтарҙы һәм күтәрә алмаҫ юғалтыуҙарҙы кисерә һәм дошмандарына ҡарағанда сәләмәтерәк, ныҡлыраҡ була. Совет һалдаттарын "фронтовой 100 грамм" менән ҡандарын ҡыҙҙырып һөжүмгә күтәреү тураһындағы миф халҡыбыҙҙың ҡаһарманлығын һәм фиҙаҡәрлеген түбәнәйтеп күрһәтеү өсөн сит илдә уйлап сығарыла. Һуғышта айыҡ Рәсәйҙә тыуған сәләмәт быуын еңеү яуланы. Был хаҡта Советтар Союзы Геройы, армия генералы Николай Григорьевич Лященко бына нимә тип яҙа: "Илһамланған шағирҙар ошо һатлыҡ 100 граммды "хәрби" тип яҙҙы. Быйнан да ҙурыраҡ мыҫҡыл итеүҙең булыуы ла мөмкин түгел. Сөнки араҡы Ҡыҙыл Армияның хәрби һәләтен ғәмәлдә кәметә ине".

50-се йылдарҙа Рәсәй элекке кеүек үк Европаның иң айыҡ илдәренең береһе булып ҡала. Йән башына иҫәпләгәндә Совет кешеһе саф спиртты инглизгә ҡарағанда - өс, американға ҡарағанда - ете, французға ҡарағанда 10 тапҡырға кәмерәк эсә.

## Эскелек нисек барлыҡҡа килгән?

1964 йылда КПСС Үҙәк Комитетының генераль секретары вазифаһына Леонид Ильич Брежнев ултыра. Ул үҙе менән Ҡаҙағстанда һынау үткән бюджетты алкоголь һатыуҙан килгән "иҫерек" аҡсалар менән тултырыу ысулын да алып килә. Алкоголь етештереү планлы рәүештә үҫешә. Яңы шарап-араҡы заводтары төҙөлә. Илдә араҡы етештереү күләме 700 процентҡа арта. "Беҙ иҡтисади ҡеүәтте ике таҡырға арттырҙыҡ", - тип маҡтана Л. И. Брежнев.

Илдә алкоголдә аҙлап ҡулланыу, икенсе төрлә әйткәндә, мәҙәни эсеү концепцияһын пропагандалау киң ҡолас ала. Кешеләрҙе, был яҡшы, тип инандырып, спиртлы эсемлектәрҙе эсергә мәжбүр итергә кәрәк була. Яйға һалынған совет пропагандаһы кинофильмдарҙы алкоголь ҡулланған күренештәр менән тултыра, граждандарҙың башына яңы тәртип образы һеңдерә башлай. Бөтөн ил буйынса махсус әҙерләнгән лекторҙар нисек итеп спиртлы эсемлектәрҙе мәҙәни ҡулланыу тураһында мәғрифәтселек эше алып бара, йәғни ялған һайлау алдына ҡуя. Ялған һайлау - кеше менән идара итеүҙең психологияла яҡшы билдәле бер ысулы. Мәҫәлән, һеҙгә балағыҙҙың өйҙә йәки фатирҙы йыйыштырыуы кәрәк. Уның алдына йыйыштырыу йәки баш тартыу һайлауын ҡуймайһығыҙ. Ә ялған һайлау тәҡдим итәһегеҙ: туҙанды һөртөргә йәки һурҙырырға, сүп-сарҙы сығарып түгергә йәки иҙән йыуырға. Уға ей таҙалауҙан баш тартыу вариантын бөтөнләй тәҡдим итмәйһегеҙ. Алкоголь менән дә шул уҡ хәл. Система түбәндәгесә ҡорола: беҙгә бала саҡтан уҡ алкоголдә өлкәндәргә ҡулланырға ярай, тип һеңдерәләр. Һәм баланың күҙ алдында алкоголь ҡулланыу бары тик өлкәндәргә генә мөмкин булған өҫтөнлөк булып тора. Ә бала үҫеп еткәс, уға йә эскесе һәм алкоголик, йәиһә аҙлап мәҙәни эсеүсе булырға тәҡдим ителә. Беҙҙең өсөн кемдер хәл иткән дә инде. Барыһы ла аҙлап мәҙәни эсеүсе булырға теләй. Шул уҡ ваҡытта өсөнсө вариант та бар - тәбиғи айыҡлыҡ. Мәҙәни эсеүсе аңға һеңдереү һөҙөмтәһендә 1980 йылға йән башына алкоголь ҡулланыу күләме 11 литрға етә. Йәғни бәләкәй балаларҙы ла индереп, һәр совет кешеһенә йылына 55 шешә араҡы

тура килә. Дәүләттең бюджетына килем инә. Бер шешә араҡы етештереү 15-20 тин булһа, ул 3 һум 62 тингә һатыла. 80-се йылдар башында алкоголь һатыуҙан бюджетҡа йылына 56 миллиард һум аҡса керә.

Әммә килем артынан ҡыуып, иҫерек енәйәтселектең, үлемдең һәм сирҙәрҙең, алкоголик ата-әсәләрҙән тартып алынған балалар һаны артыуын, хеҙмәт етештереүсәнлегенең түбәнәйеүен күрмәйҙәр. Иҡтисадсылар иҫәпләүенсә, алкоголлештереү әҙәмтәләренең тура һәм ситләтелгән сығымдары килемдә кәм тигәндә өс тапҡырға арттыра. Бюджетҡа бер һум инһә, өс һум юғалтыла. 80-се йылдарға һәр бишенсе совет гражданы йә эскесегә әйләнә, йә алкаш була. Яҡынса үлтерештәрҙең - 65, урлашыуҙарҙың, талауҙарҙың - 75, юл ваҡиғаларының 40 проценты эскән килеш яһала. Шунда уҡ барлыҡ балаларҙың 3,5 процентының аҡыл һәм физик үҫешендә - ауыр, 13 процентының аҡыл кимәле тотҡарланыуында уртаса тайпылыштар булыуы асыҡлана. Йәғни һәр алтынсы бала нормаль түгел. Аныҡ һандар сер итеп тотола һәм дәүләт сере булып тора. СССР-ҙың төрлө төбәктәрендә аҡыл йәһәтенән тайпылышы булған балалар өсөн нисә мәктәп булыуын ҡарайыҡ. Омск өлкәһендә 60-сы йылда ике шундай мәктәп булһа, 1980 йылда 19 иҫәпләнә. Донецк өлкәһендә 60-сы йылдарҙа 4 мәктәп булһа, 80-се йылда был һан 38-гә етә. Латвияла 60-сы йылдарҙа 12 мәктәп булһа, 80-се йылда - 56. Хакасия Республикаһында бер генә мәктәп булһа, туғыҙға әйләнә. Нисек кенә

нунды аша атлаусыларға иһә, ҡыҙған тимер менән маңлайына шешә формаһында мөһөр баҫҡандар. Был ир-ат өсөн махсус билдә булып торған - был ҡыҙҙы ҡатын итеп алырға ярамай, тоҡомоңа хәүеф янай!

Эсеү мәҙәниәте таралыу процесында алкоголгә мөнәсәбәттең нисек үҙгәреүен күҙәтеү ҙә ҡыҙыҡлы. Теләһә ниндәй алкоголь эсемлегенең нигеҙен, ҡиммәтлеме, түгелме ул, мөһим түгел, этил спирты - этанол тәшкил итә. Уның химик формулаһы С5Р5ОН. Быға беҙҙә мәктәптә уҡыталар. Әммә алкоголдең үлемесле наркотик ағыу икәнлеге тураһында бер ҡайҙа ла иҫкәртмәйҙәр. Шуға ҡарамаҫтан, 1972 йылда ҡабул ителгән ГОСТ "Этил спирты - тиҙ янаусы, төҫһөҙ, үҙенсәлекле еҫле шыйыҡса, көслө тәьҫирле наркотиктарға ҡарай, тәүҙә ҡуҙғыу, һуңынан нервылар системаһының фалижына килтерә", тип билдәләй. Әммә алкоголь ҡулланыуҙы пропагандалау киң ҡолас алыуға бәйле, ГОСТ бер-нисә тапҡыр үҙгәртелеп яҙыла. 1982 йылда уға шундай үҙгәреш индерелә: "Этил спирты - тиҙ янаусы, төҫһөҙ, үҙенсәлекле еҫле шыйыҡса, көслө наркотиктарға ҡарай". Ә1993 йылда иһә: "Этил спирты, тиҙ ҡабынаусы, төҫһөҙ, үҙенсәлекле еҫле шыйыҡса". Күреүебеҙсә, 20 йыл эсендә тәүге билдәләмәнән уның "көслө наркотиктарға ҡарай, тәүҙә көслө ҡуҙғыу, һуңынан нервылар системаһының фалижына килтерә" тигән һүҙҙәр бөтөнләй алып ташлана.

ға алмашҡа нефть сығарыу күләмен арттырырға һәм уның хаҡын төшөртөргә күндерә.

Ай эсендә, 1986 йылдың яҙына "кара алтын"дың хаҡы барреленә 30 долларҙан 12 долларғаса төшә. Үҙенең бюджетын нефткә юғары хаҡ күҙлегенән сығып планлаштырған СССР етди проблемаларға осрай. Илдә тауар ҡытлығы башлана. Иҡтисади үҫеш буйынса хөкүмәт ағзалары алтын запасының кәмеүе хаҡында рапорт бирә. Социологтар халыҡтың ҡәнәғәтһеҙлеге үҫеүе хаҡында белдерә. Горбачевҡа буш кәштәләр менән ҡәнәғәт булмаған халыҡты тынысландырырға һәм бюджетты өлөшләтә тултырырға тейешле тәкдим яһала. 1988 йылда хөкүмәт ағзалары ҡабаттан бюджетты үҙ халҡын эсереү юлы менән тулыландырырға ҡарар итә. "Мин үҙемдең СССР-ҙың Президенты вазифаһында эшмәкәрлегемде туҡтатам, - тип белдереү яһай М. Горбачев. - Был ҡарарҙы принципиаль инанысым буйынса ҡабул итәм".

### Мәҙәни эсеү һөҙөмтәһе…

Сит илдең махсус хеҙмәттәренең Советтар Союзын емереү буйынса планы тормошҡа аша: власҡа Ельцин килеү менән иҫерек халыҡтың танау аҫтынан мут хосусилаштырыу схемалары буйынса төп дәүләт активтары тартып алына. Дәүләттең алкоголь предприятиелары ла шәхси ҡул-

*ләнәләр. Кешеләр һуғышта вафат булғанға ҡарағанда ла күберәк үлә, ғәрипләнә, балалар етем ҡала. Балалар, ололар эскән, асыулы кешеләр ҡулына ҡарап ҡалды һәм улар һуғыш ваҡытындағыға ҡарағанда ла насарыраҡ йәшәй. Төпкөл ауылдарҙың барыһында ла спиртлы эсемлектәрҙе бурысҡа бирәләр. Һатыусылар, шулай итмәгәндә, бөтөнләй килем булмауы менән аҡлана. Һатыу тәүлек әйләнәһенә дауам итә. Бер табындан һуң 6-12 кеше үлә. Күршеләребеҙ ике 20 йәшлек улдарын юғалтып, ҡарт көндәрендә күҙ йәштәренә мансылып ҡалды. Ай эсендә тотош ғаиләләр юҡҡа сыға. Бер ғаилә икенсе сабыйҙарын көтә ине, уның донъяға килеренә ике аҙна ғына ваҡыт ҡалғайны. Кискеһен ир кеше эсергә аҡса һораған, ҡатыны бирмәгән. Ир ҡатынын ҡурҡытырға була ҡулына мылтыҡ алып, ҡатынының маңлайына төҙәгән дә, тәтегә баҫҡан. Ошо бөтөн күренеш ике йәшлек улдарының күҙ алдында булған.*

*Ҡалаларҙа, бәлки, спиртлы эсемлектәрҙе аҡсаға һәм бары тик киске сәғәт һигеҙгә тиклем генә һаталарҙыр, ә ауылда барыһы ла яҙмыш ҡосағына ташланған. Ошо тиҫтә йыл эсендә генә күпме кеше эсеп үлде, күпме бала етем ҡалды, күпме кеше ғәрипләнде. Бер генә һуғышта ла шунсама яҙмыш ҡыйралмағандыр. Ошондай хаттан - балаларҙың, әсәләрҙең, ҡарттарҙың үтенесенән һуң да бер нәмә лә үҙгәрмәҫме икән ни?*

*Карамова Татьяна.*
*Төнгәр ауылы, Алтай Республикаһы".*

# ТАРИХЫ

үкенесле булмаһын, беҙ аҡылһыҙ илгә әүерелә барабыҙ.

### Спирт һәм сәләмәтлек

Спиртлы эсемлектәр буласаҡ балаларҙың сәләмәтлегенә нисек тәьҫир итә? Алкоголь, мутация барлыҡҡа килтереүсе башҡа канцерогендар кеүек үк, тәү сиратта бүленеүсе күҙәнәктәргә йоғонто яһай. Ир-ат организмында иң тиҙ бүленеүсе туҡыма - мәней эпителийы. Алкоголь, геномдарын боҙоп, сперматозоидтарҙы зарарлай. Яңы күҙәнәктәр бүленеү, булғандарын ҡабатлау аша барлыҡҡа килгәнлектән, ваҡыт үтеү менән ДНК-һы зарарланған мәней күләме арта. Ҡатын-ҡыҙ түллегендә енси күҙәнәктәрҙең һаны сикле. Түл күҙәнәге ҡыҙ тыуғанға тиклем һәм тыуғандан һуң тәүге өс йылда формалаша. Түл тышы ошо күҙәнәктәрҙе теләһә ниндәй зарарлы йоғонтонан һаҡлай, әммә этил спиртынан ғына һаҡлай алмай. Этил спирты, яҡшы иретеүсе булараҡ, түл эсенә үтеп инә һәм күҙәнәктең бер өлөшөн зарарлай. Ә был күҙәнәк яңы кешегә ғүмер биреүе мөмкин. Алкоголдең һәр бокалы менән зарарланған күҙәнәктәр күләме арта. Һәм бер нисә йылдан һуң тап ошо Яңы йылда эскән бер бокал шампан шарабынан зарарланған күҙәнәк аталаныуы мөмкин. Был бокал аҡыл һәм физик йәһәттән етди тайпылышы булған ауырыу балаға ғүмер биреүе ихтимал. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, йыл һайын Рәсәйҙә 100 мең самаһы бала үҫешендә аномаль тайпылыштар менән тыуа. Уларҙың яҡынса һәр бишенсеһе ғүмеренең беренсе аҙнаһында уҡ вафат була.

Борон был хаҡта яҡшы хәбәрҙар булғандар. Мәҫәлән, Рустә аҡ алкоголле сурицаны бары тик 9-ҙан да кәм булмаған балалы ир-ат ҡына эсә алған. Ҡатын-ҡыҙ бөтөнләй эсмәгән. Римда Ромул ҡануны буйынса, 35 йәшкә тиклемге ир-атҡа - шарап, ҡатын-ҡыҙға алкоголь эсеү бөтөнләй тыйылған. Боронғо Һиндостанда ла ҡатын-ҡыҙға шундай тыйыу йәшәгән. Ә ошо ҡа-

### Сираттағы "коро" закон

1985 йылдың 17 майында илдең барлыҡ үҙәк баҫмаларында һәм телевидение, радио аша партия Үҙәк комитетының алкоголизм һәм эскелеккә ҡаршы тороу буйынса саралар тураһында ҡарары иғлан ителә. Халыҡта был закондарҙы "коро" закон тип нарыҡланылар. Бер йыл үткәс, алкоголь ҡулланыу йән башына 4 литрғаса кәмей. Был шунда уҡ демографик күрһәткестәргә лә йоғонто яһай.

Суррогат ҡулланыу һәм сәмәй ҡайнатыу күләме артыуға ҡарамаҫтан, алкоголдән

дарға күсә. Алкоголь яңы көс менән магазин кәштәләренә, кибеттәргә, үҙәк телевидениеға менеп ҡунаҡлай. Алкоголь ҡулланыу күренештәре менән тулы рекламалар, фильмдар, сериалдар граждандар аңына традиция һәм тормош нормаһы итеп һеңдерелә. 1996 йылда йән башына спиртлы эсемлектәр ҡулланыу рәсми статистика күрһәткестәре буйынса 16 литрға етә. Илдә урам балалары, алкоголик ата-әсәләренән ҡасып сығып киткән һәм ҡа-

***Теләһә ниндәй алкоголь эсемлегенең нигеҙен, ҡиммәтлеме, түгелме ул, мөһим түгел, этил спирты - этанол тәшкил итә. Уның химик формулаһы С5Р5ОН. Быға беҙҙә мәктәптә уҡыталар. Әммә алкоголдең үлемесле наркотик ағыу икәнлеге тураһында бер ҡайҙа ла иҫкәртмәйҙәр. Шуға ҡарамаҫтан, 1972 йылда ҡабул ителгән ГОСТ "Этил спирты - тиҙ янаусы, төҫһөҙ, үҙенсәлекле еҫле шыйыҡса, көслө тәьҫирле наркотиктарға ҡарай, тәүҙә ҡуҙғыу, һуңынан нервылар системаһының фалижына килтерә", тип билдәләй. Әммә алкоголь ҡулланыуҙы пропагандалау киң ҡолас алыуға бәйле, ГОСТ бер-нисә тапҡыр үҙгәртелеп яҙыла.***

ағыуланып үлеү - 50, бәхетһеҙлек осраҡтары һәм көс ҡулланыу һөҙөмтәһенән үлеү 36 процентҡа, үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар һаны 41 процентҡа кәмей. Алкоголгә ҡаршы ҡарар ярты миллион самаһы үлемгә кәртә ҡуя. Ошо осорҙа тыуым бығаса булмағанса арта. 85-88-се йылдарҙа илдә алдағы йылдарға ҡарағанда миллион ярымға күберәк бала тыуа. Был 40 йыллыҡ осор өсөн абсолют рекорд була.

Сит ил аналитиктары совет етәкселегенең яңы аҙымдары менән ҡыҙыҡһына башлай. Америка иҡтисадсылары Рональд Рейгандың өҫтәленә, Советтар Союзының иҡтисады ҡоралланыу артынан ҡыуыу һөҙөмтәһендә һәм нефтҡә хаҡтарға бәйле бик наҡыҫайған, тигән донесение һала. Хәрби аналитиктар, СССР Афғанстандан сыға алмай, тип доклад яһай. АҠШ Сәғүд Ғәрәбстанын заманса ҡорал-

рауһыҙ балалар һаны тағы ла күбәйә. Эскегә бирелгән ата-әсәлә бала тәрбиәләү ҡайғыһы булмай.

Ир-аттың уртаса йәш кимәле 57-гә тиклем кәмей. 90 процент осраҡта улар алкоголь ҡулланыуҙан вафат була. Статистика буйынса 90-сы йылдар һуңында 7 миллион ҡатын-ҡыҙға ир-ат булмай, улар яңғыҙаҡ тормошҡа дусар ителә. Һөҙөмтәлә илдә тыуым кәмей. 90-сы йылдар башынан үлем тыуымдан артып китә. 1992 йылда үлеүселәр һаны тыуымға ҡарағанда 300 мең кешегә, 1993 йылда 700 мең кешегә күберәк була. Артабан инде был һан йылына бер миллионға етә. Рәсәйҙә алкоголь афәте ҡағылмаған бер генә ғаилә лә табып булмай.

Бына РФ Хөкүмәтенә хат-мөрәжәғәттәрҙең береһе: *"Беҙҙең илдә эскелектән башҡа барлыҡ проблемалар менән шөғөл-*

## Айыҡлыҡ - йәшәү рәүеше

Телевизорҙан һаман да ҡош киҙеүе йәки атипик пневмонияның шикле хәүефе хаҡында һөйләүҙе дауам итәләр. Ә өҫ тиҫтә йыл дауамында көн һайын меңдәрсә кешенең ғүмерен өҙгән хәүеф хаҡында шым ҡалыуҙы хуп күрәләр. Шулай уҡ донъяның 41 илендә ҡоро закон ҡабул ителеүе, ә 80-ендә айыҡлыҡтың йәшәү рәүеше булыуын йәшереп ҡалдырырға маташалар. Был илдәрҙә эскән кешегә ярташыл тип ҡарайҙар. Һиндостанда һәм Ҡытайҙа бер кешегә йылына ни бары 50 грамм спирт тура килә. Мосолман донъяһы бөтөнләй эсмәй тиерлек. Тап ошо төбәктәр бөгөн иҡтисадта ла, тыуым буйынса ла лидерҙар рәтендә бара.

Беҙҙең илебеҙ ҙә цивилизация үҫеше өсөн күп эшләне. Ул донъяға бөйөк ғалимдарҙы: Ломоносовты, Менделеевты, космонавтикаға нигеҙ һалған Циолковскийҙы бирҙе; беҙ бөйөк полководецтар: Нахимов, Кутузов, ғүмерендә бер тапҡыр ҙа еңелмәгән Суворов менән хаҡлы ғорурланабыҙ; Рәсәйҙә бөйөк табиптар: Пирогов, Павлов, быуаттан ашыу йәшәгән һәм донъяла берҙән-бер оло йәштәге эшләп йөрөүсе хирург булараҡ Гиннестарҙың рекордтар китабына индерелеүсе Углов йәшәгән һәм эшләгән; беҙҙең билдәле рәссамдарыбыҙ Репин, Айвазовский, Левитандың картиналары иң яҡшы музейҙарҙа һәм галереяларҙа урынлашҡан; бөйөк рус яҙыусылары Достоевскийҙың, Тургеневтың, Толстойҙың әҫәрҙәре донъя әҙәбиәтенең алтын фондына индерелгән һәм донъяның барлыҡ телдәренә тигәндәй тәржемә ителгән. Тотош кешелектең мираҫына әйләнгән асыштар һәм уйлап табыуҙар беҙҙең ысын тарихыбыҙҙы һәм ысын традицияларыбыҙҙы тәшкил итә. Рәсәйҙә һәр саҡ эскәндәр, тип мәҙәни эсеүҙе яһалма рәүештә һеңдерергә тырышыуҙан айырмалы, беҙ халыҡты эсереүҙең юлға һалынған системаһына етди һөжүм яһай алабыҙ. Айыҡлыҡ менән сәләмәтлегебеҙҙе һәм яҙмышыбыҙҙы ҡыйратыусы, балаларыбыҙҙың именлеген ҡаҡшатыусы ошо алкоголь конвейерына аҡса килеүҙе туҡтатабыҙ. Беҙҙең был мөмкинлегебеҙ ғәмәлдә йылы мөнәсәбәттәр, хәстәрлек, дуҫлыҡ һәм ысын мөхәббәт менән һуғарылған лайыҡлы тормош юлы үтеүҙең үҫеп килеүсе быуынға дөрөҫ өлгөһө булып торасаҡ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

✔ *"Бөйөктәр күп, Рәшиттәй шиғриәт даһиҙары юҡ. Мин уның айырым өс китабын, ике томлыҡ һайланма әҫәрҙәрен - Башҡортостанда, "Йөрәк" исемле шиғырҙар китабын татар телендә баҫтырып сығарҙым".*



ӨС ҺОРАУ

# ИЗГЕЛЕКТЕҢ ИРТӘҺЕ-КИСЕ ЮҠ

**Был юлы өс һорауыбыҙҙы ошо көндәрҙә 75 йәшлек юбилейын билдәләүсе тынылған әҙибебеҙ Риф МИФТАХОВҡа төбәйбеҙ.**

**➔ Риф ағай, һеҙ ижад менән ҡасан шөғөлләнә башланығыҙ? Ҡайны берәүҙәр фәстергәнсә, әллә бала саҡта уҡ "вундеркинд" булдығыҙмы?**

- Үҙем өсөн генә шиғырҙар яҙыу 15 йәштәрҙә үк башланһа ла, тәүге ижад емештәрем бары ике йылдан һуң Маҡар (Ишембай) район гәзитенең 3 февралдә сыҡҡан һанында донъя күрҙе. "Уҡыусы Риф Мифтахов шиғырҙары" тигән баш аҫтында минең хаҡта белешмә менән дүрт шиғырым баҫылғайны. Был хәл минә ҡанат ҡуйҙы. Ҡабаттан ҡарап сығып, редакцияға элегерәк ижад иткәндәремде лә ебәрә башланым. Хәбәрҙәр ебәреүемде лә һорап, мөрәжәғәт иткәстәр, бәйләнештәр тағы ла нығый төштө. Колхоздағы күҙгә күренгән етешһеҙлектәрҙе лә мәҡәләләремдә, ҡайһы ваҡыт рифмалашҡан юлдарҙа, фельетондарҙа сағылдырҙым. Редакцияның үҙ кешеһенә әүерелдем. Һиһайәт, район буйынса бер төркөм ҡәләмдәштәр рәтендә 1958 йылда Өфөлә уҙған эшсе-крәҫтиән хәбәрселәренең съезына мине лә делегат итеп һайланылар. Өфөнө беренсе күреүем шул йылда булды. Беҙ унда Әхнәф Дилмөхәмәтов менән иң йәш делегаттар инек. Беҙгә Ленинградтағы журналистар институтына уҡырға барырға тәҡдим иттеләр. Мин баш тарттым.

1959-1962 йылдарҙа мин Мәскәүҙә әрме хеҙмәтендә булдым. Яҙыу-һыҙыу эштәре бында ла күңелгә тынғы бирмәй ҡытыҡлап йөрөнө. Хеҙмәт аҙағына бер ҡалын дәфтәр "ижад емештәрем" менән тула яҙғайны. Тик хеҙмәтем тамамланмаҫ элек университетҡа уҡырға кергәс (ул ваҡытта бындай мөмкинлек бар ине), әҙәбиәт ғүмерлек шөғөлөм булырын аңлаһам да, ошо дәфтәрҙән ҡотолорға булдым - яндырҙым. Рәхәт булып китте, сөнки һәр саҡ бөгөнгө иртәгәгә ярамаҫҡа мөмкин тип ҡараным, хәҙер ҙә шулай ҡарайым. Үҙенә талап билдәһе һәр саҡ булырға тейеш.

**➔ Риф ағай, һеҙҙең ижад диапазонығыҙ киң һәм төрлө: күләм йәһәтенән дә, йөкмәткеһе яғынан да. Лирик, сатирик шиғырҙар, әллә күпме көлкөләгибрәтле шаян хикәйәләр, повестар. Бындай төрлөлөктөң сере ниҙә?**

- Әҙиптәрҙең йәштәре, уларҙың донъяға ҡарашы ла төрлөсә булған кеүек, жанрҙары ла төрлө. Әйтәйек, беҙҙең әҙәбиәттә күләмле, төрлө бәйләнешле хәл-ваҡиғалары, ҡатнашҡан персонаждарының күплеге менән айырылып торған роман жанрында эшләүсе бер-нисә яҙыусыбыҙ бар. Бер-нисә жанрҙа ижад иткән әҙиптәребеҙ ҙә байтаҡ. Һәр кемдең үҙ ижады, үҙ ижад донъяһы...

Мин бер яҡтан да уларға оҡшамағанмын, күрәһең. Бер төрлөлөк мине тиҙ ялҡыта. Йә моңһоу лирик тойғоларға "батам", йә сатира яҙып, ҡыҙыҡ табам, йә повесть геройҙарым уйы-юлы буйлап йөрөйөм, өс-дүрт һүҙҙән торған фәһемле һүҙҙәр эҙләйем. Был заманға ла, кәйефкә лә бәйле. Һәр береһе минә ижади ләззәт, үҙемсә тапкан асыш-яңылыҡ килтерә, йән-күңел ҡәнәғәтлеге тыуҙыра. Минеңсә, әҙәбиәт, әҙип төрлө булыуы менән ҡыҙыҡлы.

**➔ Һеҙҙең тағы ла бер изге эшегеҙ хаҡында һөйләшке килә. Йән ауырыуына юлыҡҡан бөйөк шағирыбыҙ Рәшит Назаровтың архивында яткан әллә күпме әҫәрҙәрҙе халҡыбыҙға еткерҙегеҙ. Ысын мәрхәмәтлек өлгөһө был. Белеүебеҙсә, был изге эшегеҙ бөгөн дә дауам итә...**

- Эйе, был эште мин ошо көнгәсә дауам итәм. Рәшит Назаров - быға̇са бер әҙәбиәттә лә булмаған күренеш. Әҙәби даһилығы - тәбиғәт, Хоҙай бүләге. Мин уға тинләрлектәрҙе табырға тип урыҫ, донъя әҙәбиәтенән бик күп бөйөк шағирҙар әҫәрҙәрен уҡып сыҡтым. Бөйөктәр күп, Рәшиттәй шиғриәт даһиҙары юҡ. Мин уның айырым өс китабын, ике томлыҡ һайланма әҫәрҙәрен - Башҡортостанда, "Йөрәк" исемле шиғырҙар китабын татар телендә Татарстандағы китап нәшриәтендә баҫтырып сығарҙым. Әле яңыраҡ кына үҙебеҙҙең "Китап" нәшриәтенә уның "Ер һәм йыһан йыры" тигән йыйынтығын тапшырҙым. Был китап быйыл уның тыуыуына 70 йыл тулыуға ҡарата сығыр, тип ышанам. Бында уның быға̇са бер йыйынтыҡта ла баҫылмаған "Гөлбикә", "Һалдат бәхете" исемле поэмалары донъя күрергә тейеш.

Рәшит архивында эш дауам итә. Тағы ла яңы әҫәрҙәрен уҡып ҡыуанырбыҙ, тигән өмөттәмен. Мәрхәмәтле булайыҡ. Уны һәр саҡ һәр ерҙә эшләп була. Изгелектең иртәһе-кисе юҡ.

ШАҒИР ҺҮҘЕ

# ҠАРАЙҺЫ КИЛӘ ДОНЪЯҒА

## Бәхетле түбәләрҙән...



### Ғәжәп ил

Булһа алдан күрер күҙлегем,
Бар нәмәне аңлар һиҙлегем:
Сәфәр сығып хатта бер үҙем
Урап ҡайтыр инем Ер йөҙөн...

Хыялы ҙур, беләм, күңелдең,
Ә шулай ҙа мин бит күп күрҙем:
Ғәжәп ерҙә ғүмер кисерҙем -
Башҡортостан, һин бит, һинең үҙең, -

Ҡышың, яҙың, йәйең һәм көҙөң -
Алмаштырыр бер ил Ер йөҙөн!
Башҡортостан - күңел түрендә
Планетаның бөтә төҫөндә!

### Бәхет тауы

Бәхет тауына менергә,
Емештәрен тирергә
Тормошонда, яҙмышында
Килгән кеше был ергә.

Һайлап алмаған төйгөн,
Насип иткән яҙғаны.
Күпме бәндәгә тик хыял
Булған бәхет тауҙары.

Ә барыбер ошо хаҡта
Әҙәм көн-төн уйлаған.
Берәүҙәргә бәхет бары
Өҫтән тик ҡул болғаған.

Тик ынтылған әҙәм йәне
Бәхете түбәһенә.
Нисә быуын ятып ҡалған
Шул тауға менә-менә.

Йыҡҡан аслыҡ, яланғаслыҡ,
Яу-һуғыш ҡоралдары.
Уларҙан да күберәк булған
Мөхәббәт ҡорбандары.

Юҡ-юҡ, бәхеткә ауыр юл
Тик ҡорбандан тормаған,
Күтәрелеп, емештәрен
Татыусы аҙ булмаған.

Шул юлда һаман кешелек,
Шул уйҙа һаман әҙәм:
Ҡарайһы килә донъяға
Бәхетле түбәләрҙән.

...Ғүмер тауым! Күпме улар:
Бейек, ауыр яулауы!..
Мөхәббәтле иң хозуры -
Бәхетле ғаилә тауы!

### Бал ҡортона мәҙхиә

Батырлығы менән шағирлығы
Һәйкәл итеп сөйһә башҡортто,
Кескәй ҡанатында ҡитғаларға
Алып осто данын - бал ҡорто.

Имән һәм гөл... "Башҡорт", "бал-ҡорт"
Үҫкән улар бер үк тамырҙан.
Бәрәкәтле ерем, йәшәгеҙ, тип,
Һыу ағыҙған, балдар тамыҙған.

Хеҙмәт иткән улар бер йән булып,
Бер саҡ башҡорт ҡортһоҙ булмаған.
Тоғро дуҫы ғәжәп иле өсөн
Мөғжизәле кәрәҙ йыйнаған.

Белгән, гүйә, хуш еҫтәре бөрккән
Ауыҙҙарҙа ирер бал-таттан
Хайран ҡалып, донъя шнтылырын
Килеүҙәрен бөтә тарафтан.

Башҡорт илендәге бал ҡортона
Әҙер маҡтау, данлау, йыр ғына:
Лайыҡ бит ул һәйкәл ҡойолоуға,
Ҙур майҙанға уны ҡуйыуға!

Ҡыуандырыр әҙәм күңелдәрен
Һынландырып беҙҙең ил-ҡортто:
Ере данын кескәй ҡанатында
Алып осҡан ябай бал ҡорто!

### Васыятыңа тоғро ҡалдыҡ, әсәй

Әсәй, кәңәштәрең хәтеремдә:
"Изгеләр бар - ауһаң, аҙашһаң.
Хоҙай түгел, бер кем ғәфү итмәҫ
Йә урлашһаң, йәки алдашһаң..."

Намыҫымды һаҡлап һәм дә паклап
Һеҙҙе һүҙең йәнгә-хәтергә.
Васыятыңа тоғро ҡалдыҡ, әсәй,
Борсолма, тип килдем әйтергә.

Оят көсө тотто яман эштән, -
Тормош, хаҡлыҡ, иман һабағың.
Тик бер әйткән кәңәш-иҫкәртеүҙән
Ғәҙел йәшәү серен аңланым.

Киткәненә ярты быуат, әсәй.
Һинең йәштән күптән оломон.
Тик ғүмергә һинә табыныусы
Кәңәш көткән кескәй улыңмын.

Балаларым - һинең ейәнсәрҙәр
Тик фотондан ҡарап таныйҙар.
Йәшәү маҡсатында - васыятыңа,
Ышан, әсәй, тоғро ҡалырҙар.

Тормоштары, беләм, еңел булмаҫ,
Хаҡ-ғәҙеллек эҙләп барғанда.
Хоҡуҡһыҙлыҡ, бурлыҡ, ялағайлыҡ
Ғәҙәти хәл булған заманда.

Уйланабыҙ, әсәй, борсолабыҙ:
Алдан атлай аҡса, ялған һүҙ.
Выжданлылар ҡулайлашмай бит ул,
Ҡалһалар ҙа яңғыҙ-яклауһыҙ.

"Изгеләр бар" тигән ике һүҙең
Һин бар саҡта, әсәй, аҡланды.
Ил тарҡалып, иман тапалғанда
Белеп булмай ҡайҙа аҡҡанды...

Әммә беләм Әсә мөхәббәте
Ваҡыт хөкөмөнән көслөрәк.
Балаһына күскән уның йәне
Була бит ул имле, изгерәк.

Йылдар үтер... Беҙ килербеҙ, әсәй,
Ожмахтағы йәнең уянып,
Ерҙә - елдәр, күктә Ай булыр ҙа
Беҙҙе ҡосор моңһоу йылмайып...

Эй, кешеләр, ниңә хәҡиҡәтте,
Быуын-быуын һуңлап аңлайбыҙ:
Беҙгә, Ергә аңлы ғүмер биргән
Әсә кеше - бәхет Аллабыҙ.

### Яңынан тыуыу

*Шәйехзада Бабич хаҡында уйланыу*

Заман һине,
исем биреп, тажламаны.
Мохтажмы ни,
хәйер, быға шағир даны.
Исем-шөһрәт
кәрәк бит ул һөнәрсегә,
Ҡорғас йәнен,
ижад түгел, шул нәфсегә.
Һин бит булдың
үҙең заман, ҡай саҡ Алла:
Айға менден
халҡың рухы илһамлаһа.
Зарланһаң да,
һин йылыңдың көлләһөнән:
Хайран иттең,
хөкөм иттең йырың менән.
Дәүер һине
(һаҡларғамы?) ныҡ туңдырҙы,
Нур сәсергә
өр-яңынан ул тыуҙырҙы.
Шағирлығың - йәштәр
өсөн исем-шөһрәт,
Тик бер бәлә -
лайыҡлылар үтә һирәк.
Баҫып алды
ижад тауын һөнәрселек,
"Мин - нур!" -
тиеп күҙҙе алдай һәр бер сөрәк.
Заман һине,
исем биреп, тажламаны,
Мохтажмы ни,
хәйер, быға шағир даны.

### Һаҡта торҙом

*1959-1962 йылдарҙа уҡсыларҙың махсус ротаһында хеҙмәт иттем.*

Һаҡта торҙом. Ҡай саҡ алға уҙҙым -
Түшем менән мәте, ҡар ярҙым.
Аңланым мин тәнем-йәнем менән
Ни икәнен һалдат булыуҙың.

"Подъем"дары һаман ҡолағымда,
Гүйә, яңғырай бөгөн теҙергә...
Походтарҙа тәкәт ҡороғанда,
Һалдат кеше - тейеш түҙергә!

Һыҡтаманым. Юҡ, әрләмәҫ һис кем,
Хеҙмәттә, тип, итек туҙҙырған.
Һалдат шинелләләр сыҙамлыҡҡа,
Сабырлыҡҡа була бер туған.

Атай-бабайҙарҙың ҡаны менән
Бар донъяға Еңеү яуланыҡ.
Яуҙа ҡылған улар батырлығын
Беҙ һалдатта нығыраҡ аңланыҡ!

Һалдат булдым. Уның рухы, дәрте
Көс-кәр өҫтәй һаман - юл ярам.
Еңеһе бар: ил хәстәре билгә
Һалдат ҡайышындай уралған.

### Васыят ҡалдырған

Һуғыш тураһында бик күп яҙҙыҡ,
Күбебеҙҙең хатта шағирлыҡ
Шул йылдарҙан алды башланғысын,
Ғәйепме ни: беҙ бит атайҙарҙы,
Ағайҙарҙы көттөк - һағындыҡ.
Әсәйҙәрҙең итәгенә йәбешеп,
Бергә иланыҡ, бергә табындыҡ...
Йөрәктәргә түҙмәй ҡәләм алдыҡ,
Булған инек хәреф таныр лыҡ,
Шулай килде беҙгә шағирлыҡ.

Һуғыш тураһында бик күп яҙҙыҡ,
Яҙа-яҙа әллә арыныҡ -
Туктап ҡалдыҡ... Һүҙҙәр ҡалманымы
Кисергәнде аҡҡа яҙырлыҡ?
Тыуманымы әллә ҡәләмдәштәр
Был алышҡа тиң һүҙ табырлыҡ?
Донъябыҙҙы биләп алдымы ни
Башҡа эштәр, башҡа батырлыҡ?

Һуғыш тураһында бик күп яҙҙыҡ...
Яңылышам - бик аҙ яҙылған:
Һәр аҙымы тыуған еребеҙҙең
Мең ҡорбандар биреп алынған.
Һәр усламы изге был тупраҡтың
Һуғарылған һалдат ҡанынан...
Яу ҡырында ятып ҡалған яуғир
Һәр быуынға васыят ҡалдырған:
Һуғыш уты ҡабат ҡабынасаҡ,
Беҙ туктаһаҡ иҫкә алыуҙан,
Беҙ туктаһаҡ уны яҙыуҙан...

*АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО*

# АУЫЛДАРЫБЫҘҘАҒЫ...

## иң кәрәкле кешеләр улар

**(Башы 1-се, 6-сы биттәрҙә).**

Әбйәлилдең ҡайһы ауыл биләмәһенән генә килмәһен, бөтөн ағинәйҙәр ҙә ауыл хакимиәте етәкселәре менән тығыҙ бәйләнеш булдырып, урында үҙҙәренең йыйылыштарын үткәрергә бүлмәләр һорап, "штаб-квартира" эшләп алыуҙары тураһында һөйләне. Хатта Таштимерҙәге һөнәрселек училищеһы ябылғас, уҡыу йортоноң ҙур бинаһын да ағинәйҙәр үҙҙәренеке иткән; үҙ көстәре менән уны йүнәтеп, матурлап, бөгөн төрлө сараларҙы ошонда үткәрәләр.

Байым ауылы биләмәһенең баш ағинәйе Мәүлидә Сөнәғәтова әйтеүенсә, йәштәргә өгөт-нәсихәт һөйләп кенә тура юлға баҫтырыуы икеле, шуға улар эшһеҙ йөрөгәндәрҙе эшкә урынлаштырып, контролдә тота икән. Сәләмәт тормош, милли матбуғатҡа яҙылыу, ауылдарҙа төрлө өмәләр, мәҙәни саралар үткәреү, урындағы халыҡтың социаль проблемаларын хәл итеү һәм башҡа бихисап эштәргә йән-фарман сабып йөрөгән ағинәйҙәр урындағы социаль проблемаларҙы хәл итеүҙә ярҙам күрһәтеүҙе төп бурыстары итеп күреүҙәрен, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыуҙарын, үҙҙәре өсөн бер нәмә лә талап итмәүҙәрен һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Йыйынға килгән Баймаҡ ағинәйҙәре лә үҙ тәжрибәләре тураһында ихлас һөйләне. Тәжрибә уртаҡлашыуҙан тыш, сарала ҡатнашыусы Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаеваға үҙ тәҡдимдәрен дә еткерҙе улар: "Бөгөн илебеҙҙе ялмап алған ҙур афәт - эскелек. Шуға күрә, һуңғы йылдарҙа айныҡтыҫтарҙың, ЛТП-ларҙың ябылыуы ҙур проблема тыуҙырҙы. Эшләмәй, эсеп йөрөгәндәрҙе элекке замандарҙағы кеүек мәжбүри рәүештә ЛТП-ларҙа дауаларға кәрәк". Шулай уҡ Баймаҡ ағинәйҙәре арҡа терәр кешеләре, таяныстары, кәңәшселәре - ир-егеттәрһеҙ тулап, тәртә емереп булмай икәнен аңғартып, һәр башланғыстарын күтәрмәләп торған көслө заттарға рәхмәт һүҙе әйтергә лә онотманылар.

"Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының эштәре тураһында һүҙ барғанда, Белорет районының Шығай, Үткәл, Хөсәйен ауылы ҡатын-ҡыҙҙарын телгә алмай булмай. "Ислам диненең традицион йүнәлешенән ситләшеп, экстремистик идеяларға бирелеп китеүҙән йәштәрҙе лә, ололарҙы ла иҫкәртеү буйынса бик күп саралар үткәрәбеҙ. Халҡыбыҙҙың ил-йортона, тыуған тәбиғәтенә битараф ҡарашын иҫкә алып, "Кеше өсөн түгел, үҙебеҙ өсөн йәшәйек!" тигән лозунг аҫтында тирә-яҡты һаҡлау буйынса эш башланыҡ, кесе йәштән балаларҙа тыуған төйәгенә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү тәү маҡсат итеп ҡуйылды. Мәктәптәрҙә класс сәғәттәренә ағинәйҙәрҙе саҡыралар, төрлө экологик өмәләр ойошторабыҙ. Тағы ла тарихи шәхестәрҙе, арҙаҡлы кешеләрҙе барлау, тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау йүнәлешендә лә эшләйбеҙ. Яҡлаусыһыҙ ҡалған һуғыш һәм тыл ветерандарына, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә ярҙам күрһәтәбеҙ, халыҡ ижадын йыйыу, боронғо йолаларыбыҙҙы тергеҙеү буйынса дәүләт структуралары менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ", - тип, үҙ эш тәжрибәләре менән уртаҡлашты улар.

Сибай ҡалаһы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Асия Ғәйнуллина фекеренсә, был ойошма бары тик халыҡ араһында абруй ҡаҙанған, үҙе өлгө күрһәтерлек ҡатын-ҡыҙҙарҙан ғына төҙөлөргә тейеш. Шулай уҡ уларҙың ағинәйҙәр эргәһендә "Һылыуҡай" студияһы ойоштороп, йәш быуындың һәр саҡ йәнәшәләрендә булыуына өлгәшеүе тураһындағы тәжрибәһе лә иғтибарға лайыҡ.

Ике сәғәттән ашыу барған фекер алышыу ваҡытында зал тулы сағыу-сағыу башҡорт милли кейемендәге ҡатын-ҡыҙҙарҙы ситтән күҙәтеп, тарихи китаптарҙа уҡыған бер осорға барып эләккәндәй булып, онотолоп, ауыҙ асып тыңлап торғанда, ҡапыл иҫкә бер мәҡәл килеп төштө: ҡырҡ йыл ямғыр яуһа ла, шыма ташҡа һыу үтмәй, тиҙәр бит әле. Киләсәктә "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ниндәй генә шарттарҙа ла халҡыбыҙҙы "ел-ямғырҙан" һаҡлап торор ҡалҡан булып формалашып етер, тигән өмөт бар.

### Ағинәйҙәрҙе ситтән ҡарап

**"Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының республика кимәлендә үткәрелгән йыйылышында мәртәбәле ҡунаҡтар ҙа ҡатнашты. Улар ағинәйҙәр хәрәкәтенең эше менән яҡынданыраҡ танышыу, уның асылына төшөнөү ниәте менән килгәйне бында. Сара тамамланғас та фекерҙәрен ишетеү ниәтендә уларға мөрәжәғәт иттек.**

**Сәлиә Мырҙабаева, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты:** Минең өсөн иң ҡыуаныслыһы - дәүләт кимәлендә хәл ителергә тейеш төрлө мәсьәләләргә ҡарата халҡыбыҙҙың битараф ҡалмауын күреү. Йәмәғәт ойошмаһы булдырып, үҙҙәренең энтузиазмы менән етди социаль мәсьәләләр буйынса ла, башҡорт халыҡ йолаларын һаҡлап ҡалыу, үҫтереү буйынса ла дәртләнеп эшләп йөрөгән был ағинәйҙәргә мин һоҡланып бөтә алмайым. Уларға хәҙер башҡа йүнәлештәрҙә лә бергәләп эшләргә кәрәк, сөнки 5 сентябрҙә Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте тарафынан "РФ ғаилә сәйәсәте концепцияһы" тигән ҙур күләмле документ ҡабул ителде, уға ярашлы беҙ ғаиләгә ҡағылышлы закондарҙы яңыртасаҡбыҙ, был өлкәләге проблемаларҙы хәл итеүгә иғтибар артасаҡ, финанслау талап иткән төрлө программаларға аҡса бүленәсәк. Депутат булараҡ, бөгөн шуны әйтә алам: үҫеше буйынса алға киткән бүтән илдәр тәжрибәһенән сығып, бөгөн беҙҙең илдең власть органдары ла ошо "Ағинәй" кеүек йәмәғәт ойошмаларына матди яҡтан ярҙам күрһәтеп һәм уңайлы шарттар тыуҙырып, йәмғиәттең төрлө проблемаларын хәл итеүгә ылыҡтырырға, уларҙы төп таянысы һәм ярҙамсыһы итеп алырға тейеш. Шул саҡта хөкүмәт алдында ниндәй генә атҡарып сыҡҡыһыҙ бурыс торғанда ла, ҡуйған маҡсаттарға өлгәшеүе ауыр булмаясаҡ. Әлегә был ойошмалар төрлө өлкәләр өсөн бүленгән гранттарға дәғүә итә, конкурстарҙа ҡатнашып, матди мөмкинлектәрен яҡшырта ала.

**Гүзәл Ситдиҡова, яҙыусы:** Беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙың әүҙемлеген, рух ныҡлығын, ихтыяр көсөн, милләтте һаҡларға тырышыуын, киләсәк быуынды ҡурсып тороуын күрҙем бөгөн. Ысынлап та, инәһе көслөнөң - иләүе көслө шул. Ағинәйҙәрҙең сығыштарын тыңлап ултырғанда, шундай күренеш иҫкә килеп төштө. Быйыл ҡыш көнө күп балалы ғаиләләрҙе Мәскәүгә саҡырып, хөкүмәт бүләктәр тапшырҙы. Тантаналы сарала Рәсәйҙең төрлө өлкәләренән килеүселәр араһында Кавказдан килгән ғаиләләр ҙә бар ине. Нимәгә иғтибар иттем: Кавказдан килгән ғаиләләрҙә һүҙҙе аталары тотто, башҡа төбәктәрҙән килгәндәргә һүҙ бирелә башлағайны, хәҙер әсәләре һөйләй инде, тип уйлап та өлгөрмәнем, шулай килеп тә сыҡты. Был беҙҙең ирҙәрҙең бөтөнләй ҡаҡшап бөтөүеме, әллә яуаплылыҡты иңдәренән төшөрөүеме, әҙергә-бәҙерлек тураһында һөйләйме? Бөгөнгө ағинәйҙәр ҡоронда ла, ирҙәрҙе күтәрәйек, тигән һүҙ булды. Ирҙәрҙе күтәрергә кәрәкмәй, улар үҙҙәре күтәрелергә, бөтөн ауырлыҡтарҙы, һынауҙарҙы иңдәренә һалырға тейеш, беҙ улар иңенә һыйынып, үҙебеҙҙе яҡлаулы итеп тойорлоҡ булһын өсөн. Һаманға тиклем ҡатын-ҡыҙҙар нимәләр эшләүен көтөп ятҡансы, бар яуаплылыҡты аңлап, үҙҙәре халыҡты саҡырып йөрөргә, ҡыйыу булырға бурыслы бит улар. Арҡа терәрлек таянысты, көстө ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттә эҙләргә тейеш, ә киреһенсә түгел.

**Зөһрә Фәйзуллина, шағирә, композитор:** Ағинәйҙәрҙең ойошоп, төрлө эштәр башҡарып йөрөүе ниндәйҙер кимәлдә ауылдарҙағы мәҙәни усаҡтарҙың, клубтарҙың, китапханаларҙың эшен күтәреп алған кеүек күреп, ҡыуанып ултырам бөгөн. Бәлки, улар халыҡтың тотоноп ҡалыр һуңғы һаламылыр. Моғайын, ағинәйҙәрҙең эш һөҙөмтәләре оҙаҡ көттөрмәҫ, ауылда бер аҙ үҙгәрештәр булыр, тип уйлайым. Сөнки был төптән күреп, киләсәкте ҡайғыртып эш иткән ойошмаға оҡшаған. Ағинәйҙәргә ҡарап, беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарҙың шундай аҡыллы, шәп кешеләр булыуына тағы бер ҡат инандым. Донъяларында әллә күпме эштәре тулып ятһа ла, маҡсат ҡуйһалар, шуға барыбер өлгәшә торған зат улар. Донъя тотҡаһын улар тотоп тора.

### Шулай итеп...

"Быға тиклем ағинәйҙәр хәрәкәтенең йәмғиәтебеҙ өсөн ни тиклем ҙур әһәмиәткә эйә булыуына төшөнөп етмәй инем, - тине ҡорҙағы һөйләшеүҙе йомғаклап **Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтай депутаты Румил Аҙнабаев.** - Бөгөнгө ҡорҙа ҡатнашып, ағинәйҙәрҙең эшенән дә мөһимерәк эш булмауын аңланым. Уларҙың үҙ-ара ихлас тәжрибә уртаҡлашыуын, ҡыҫҡа ғына арауыҡ эсендә ни тиклем мөһим эштәр башҡарып өлгөрөүен күреп, һоҡланып ултырҙым. Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ил халҡына Мөрәжәғәтнамәһендә нәҡ ошондай йәмәғәт ойошмалары булдырырға, улар башҡарған эштәр үтәлергә тейеш, тигән фекер беренсе урында тора. Минең өсөн ағинәйҙәрҙең төп бурысы - киләсәк быуынды рухлы, илһөйәр итеп тәрбиәләү. Ҡыҙҙарыбыҙҙы ысын ҡатын-ҡыҙ, малайҙарыбыҙҙы ысын ир-егет итеп үҫтереү ҙә мөһим бурыс. Ир балаларҙы әсәһенең итәгенә йәбештереп йөрөтмәйек, юғиһә ул бер ваҡытта ла ышанnetwork, һүҙен һүҙ итерлек уҙаман булып буй етмәйәсәк. Башҡорт балаһы тәпәй баҫҡандан алып атҡа атланған, ҡолап төшкәндә лә иламаған, үҙ аллы булған. Шуға ла халҡыбыҙ бөгөнгәсә үҙен айырым милләт итеп һаҡлап ҡалған, рухиәтен юғалтмаған, ата-бабаларҙан ҡалған йолаларын онотмаған. Ағинәйҙәр ҙә милләтебеҙҙең киләсәге булған балаларыбыҙҙы һынмаҫ рухлы, тамырлы итеп үҫтереүгә айырыуса иғтибар бүлер, тип ышанам."

**Сәриә ҒАРИПОВА.**



Иштимер Йосопов фотоһы.

✓ Һыуыҡ һыу менән ҡойоноу кешенең иммунитеты һәм эске биҙҙәр системаһы эшен көйләй, һалҡын тейҙереп ауырыуҙан һаҡлай. Бынан тыш, ғалимдар фекеренсә, һыуыҡ һыу менән ҡойонған кеше үҙен күпкә бәхетле тоя.



ИНТЕРНЕТТАН



# АСЫУЛАНМА...
## йөрәгең һау булыр

■ "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух" тигән әйтемдең дөрөҫлөгөн ғалимдар тағы бер тапҡыр раҫланы. Америка ғалимдары билдәләүенсә, сәләмәт балаларҙың баш мейеһенең хәтер һәм белем алыу өсөн яуап биргән өлөшө лә яҡшы үҫешкән була. Тикшереүҙәрҙә 9-10 йәшлек балалар ҡатнашҡан, белгестәр уларҙың физик мөмкинлектәре менән интеллектуаль һәләттәрен сағыштырып ҡараған. Физик яҡтан әүҙем балалар тиҫтерҙәренә ҡарағанда күпкә аҡыллыраҡ та булып сыҡҡан, уларға кешеләр менән аралашыу еңелерәк бирелгәнлеге лә асыҡланған. Шуға ла баланы төрлө яҡлап камиллаштырыу өсөн спорт менән шөғөлләнеү мотлаҡ, ти ғалимдар.

■ Асыуланыу - сәләмәтлеккә ҙур зыян килтерә. Нью-Йорк университетының медицина үҙәге ғалимдары раҫлауынса, нимәгәлер асыуланғандан һуң бер нисә сәғәт үткәс тә кешегә инфаркт йәки инсульт кисереү хәүефе янай. Йөрәк тибеүе йышайыуы, артериаль ҡан баҫымы күтәрелеүе йыш ҡына кире эҙемтәләргә килтерә. 1966 йылдан 2013 йылға тиклем алып барылған тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре асыуланыу тойғоһо кисереүселәрҙә күберәк күҙәтелә.

■ Һуңғы осорҙа диетологтар һәм табиптар сырҙы файҙалы ризыҡтар исемлегенән алып ташлағайны. Әммә был ризыҡтан тулыһынса баш тарыу кәрәкмәй, ти белгестәр. Сыр - аҡһым, кальций, фосфор һәм организм өсөн кәрәкле башҡа матдәләр сығанағы булып тора. Артыҡ калорияларҙан ҡурҡҡандар иһә сырҙың фета, моцарелла, пармезан кеүек сорттарына өҫтөнлөк бирә ала, мәҫәлән, фета сырының 50 грамында бары 74 калория, әммә аҡһым күләме - 4 грамм. Моцарелла майһыҙландырылған һөттән яһала. Пармезанда - натрий, Швейцария сырында фосфор күп.

■ Ябай тоҙға ҡарағанда, таш һәм диңгеҙ тоҙо файҙалыраҡ һанала. Әммә Salt and Health компанияһы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, тоҙҙоң был төрҙәренең химик составында айырма бөтөнләй юҡ. Волфсан превентив медицина институты табиптары фекеренсә, кулинарҙарҙың таш йәки диңгеҙ тоҙонда мөһим минераль матдәләр күберәк тигәне дөрөҫлөккә тап килмәй. Табиптар шулай уҡ бөгөн кешеләрҙең тоҙҙо кәрәгенән артыҡ ҡулланыуы тураһында ла белдерә. Тоҙҙоң көндәлек нормаһы - 1 балғалаҡ, әгәр ул ошо билдәнән ашып китһә, ҡан баҫымы күтәрелеү, инсульт ҡурҡынысы янай.

■ Мичиган университеты ғалимы Джэйсон Моузер кешеләр үҙҙәре яһаған хатаны төрлөсә ҡабул итеүен асыҡлаған. Эксперттар раҫлауынса, үҙенең хатаһында нимәгәлер өйрәнәм, тип уйлаусы кешеләрҙең аҡыл ҡеүәһе күпкә үҫешкән була, улар яңылышыуҙарҙы һәм хаталарҙы ла еңелерәк ҡабул итә. Тормоштағы һәр осраҡтан ниндәйҙер һабаҡ алырға ынтылыусылар, әгәр ҙә ситуация ҡатмарлашып китһә, мин уны мотлаҡ хәл итәсәкмен, әммә бер нәмә лә килеп сыҡмаһа, был проблеманы аңларға тырышасаҡмын, тип уйлай. Ә бына тағы ла аҡыллыраҡ була алыуҙарына ышанмағандар бер ҡасан да үҙҙәренең шәхси тәжрибәһе менән ҡуллана һәм үҙ хатаһында өйрәнә алмаясаҡ.

МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

# "ПАРАЛЛЕЛЬ ДОНЪЯ...
## уйҙырма түгел"



Район үҙәгендә егерме йыллап элек "Һаулыҡ" төркөмө ойошторолғас, мин дә ул төркөмгә тәүгеләрҙән булып ҡушылып киттем. Иллеләгән ағзаһы булған был төркөмдө әлеге лә баяғы халыҡ һаулығы өсөн янып-көйөп йөрөгән Марат ағай Ишмөхәмәтов ойошторғайны. Тора-бара төркөмөбөҙ менән Ислам динен өйрәнеүгә күсеп киттек. Намаҙ уҡыйбыҙ, бер-беребеҙгә өйрәтәбеҙ, ураҙалар тотабыҙ, күмәкләп ауыҙ асыу мәжлестәренә йыйылышабыҙ, Ҡөрьән аяттарын ятлайбыҙ. Төркөмдәштәремдең күбеһе Ҡөрьәнде ғәрәпсә уҡырға өйрәнеп алды. Мин транскрипцияһын ғына уҡыйым. Дин дәрестәренә йөрөргә форсат теймәнеме, ғәрәпсә уҡырға өйрәнә алманым. Үҙаллы өйрәнеп ҡарарға булып, ғәрәп теле әлифбаһын асып ҡарайым да, бормалы-йоморсалы хәрефтәрҙән, хәреф баштарындағы өтөр-һыҙыҡтарҙан күҙем ҡамашып: "Ҡуй, минән булмаҫ, ваҡыт әрәм итеп ултырмайым әле, булмағанды..." тип, Әлифбамды ябып, ситкә һалып ҡуям. Бындай хикмәтле хәрефтәрҙе уҡырға бик башлы кешеләр генә өйрәнә алалыр ул, тип уйлайым. Шулай ҙа берәй ваҡыт Ҡөрьәнде һөйөклө бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең телендә уҡырға өйрәнеремә шул тиклем өмөтөм ҙур. Транскрипция Ҡөрьән теленең матурлығын, өндәрҙең нескәлектәрен бирә алмай бит инде ул. Ҡөрьән тәжүид менән уҡылғанда уның ауазы тулҡын булып тәндең һәр күҙәнәгенә үтеп инә лә, бөтә тәнде ток үткәндәй зымбырлатып, уны әйтеп аңлата алмаҫлыҡ хәлгә килтерә, күңелгә шундай рәхәт булып китә. Белер-белмәҫ уҡылған Ҡөрьәндән мин ундай тулҡынланыу хисе кисергәнем юҡ. Беҙҙең Таһир мулла Ҡөрьәнде шул тиклем матур итеп, үҙенсәлекле бер моң менән көйләп, еренә еткереп уҡый, уның уҡығанын һәр саҡ бөтә ғәм мөкиббән китеп, донъяһын онотоп, ихлас тыңлай. Уны тыңлаһаң, ҡайғыларың тарала, үҙеңде икенсе бер донъяға барып эләккән кеүек хис итәһең. Башҡаларға нисектер, миңә шулай тойола. Минең дә Таһир мулла кеүек матур итеп, шартына килтереп, Ҡөрьән уҡырға өйрәнеп алғым килә ине...

Бер-нисә йыл элек Ҡөрьәнде дөрөҫ итеп уҡыуҙың кеше организмына ғына түгел, параллель донъяға ла нисек тәьҫир итеүенә бәйле бер ҡыҙыҡ хәлгә шаһит булдым. Шуны бәйән итмәксемен.

Халыҡ беҙҙә ихлас йөрөй мәсеткә. Был юлы ла кеше һәүетемсә йыйылғайны. Мәсеттең ирҙәр яғы ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡынан селтәр тюль менән генә айырылған, шуға ла ул яҡ үтә күренеп тора. Бына аҙан әйтелеп, барса халыҡ намаҙға баҫты. Сөннәт намаҙ уҡылып бөткәс, имам баҫып тороп хөтбә уҡый башланы. Имамыбыҙ оло кеше. Дини белеме булһа ла, доғаларҙы ауырлыҡ менән уҡый, һүҙҙәрҙе әйтеп еткермәй, туҡтап-туҡтап ала. Бер ваҡыт шәйләйем: мәсеттең урман яҡ стенаһы яғында эреле-ваҡлы ниндәйҙер шәүләләр ҡыбырлаша башланы. Кешеләр араһынан намаҙлыҡтарҙы тапап, үрле-ҡырлы күсеп йөрөй былар. Бер шәүлә хатта мөнбәргә менеп ултырып алды. Имам хөтбә уҡый, ә мин шул шәүләләрҙе күҙәтәм. Бер ваҡыт бер шәүләнең туҡтап, минең яҡҡа төбәлеп ҡатҡанын һиҙеп ҡалдым. Шул арала ошо шәүләнең утлы күҙҙәре пәйҙә булды. Икәүләп бер-беребеҙгә текләгәнбеҙ, күренеп тора, ул ҡурҡмай, мин дә ҡурҡмаҫҡа тырышам, һыр бирмәйем тегегә. Шәүләләр менән мәсет тулып китте. Мәсеттә лә ошондай ят есемдәр була икән дә ул, тип аптырап ултырам. Мәсетте тау аҫтына, йылға ярына һалырға ярамай, тигәндәрен ишеткәнем бар ине. Унда ултырған мәсеттәргә йыйылған бысраҡтан арыныуы ауырыраҡ була икән. Шуның өсөн дә элек-электән мәсеттәрҙе тау баштарына, тау битләүҙәренә, асығыраҡ урындарға һалғандар. Бындай урындарҙа мәсеттәр һәр төрлө бысраҡтан тиҙерәк таҙарынған. Ошо мәсет урынлашҡан тау битләүендә йә еләк, йә бәшмәк эҙләп йыш ҡына йөрөргә тура килә. Хикмәтле һәм бер төрлө шомло тау ул. Бер яғы Алағуянға, икенсе яғы Ағиҙелгә топ-тоҡан төшкән нәҙек-оҙон был тауҙа көпәкөндөҙ ҡайһы яҡҡа китергә белмәй аҙашып йөрөгәнем дә бар минең...

...Бына бер ваҡыт мөнбәрҙә ирәйеп китеп ултырған шәүлә ҡапыл тертләне, хатта тороп уҡ баҫты. Башҡа ваҡ шәүләләр ҙә намаҙлыҡ тапап йөрөүҙән туҡтап ҡалдылар. Ул арала хөтбә лә, вәғәз уҡыуҙар ҙа тамамланды. Бар халыҡ йома намаҙының фарызына баҫырға әҙерләнде. Ҡапыл ишек асылып китте лә, мәсеткә Таһир мулла килеп

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҺЫУ МЕНӘН ҠОЙОН ҺӘМ...
## изгелек эшлә



**Август башында АҠШ-та старт алған Ice Bucket Challenge ("Бер биҙрә боҙло һыу менән һынау") флешмобы Башҡортостанда ла киң танылыу алды. Көнбайышта ҡабырға яҡтағы амиотрофик склероз (боковой амиотрофический склероз) менән ауырығандарға ярҙам итеү ниәтенән башланып киткән акция республикабыҙҙа ике аҙна эсендә "Беҙҙең балалар" хәйриә фондына ғына 100 мең һумға яҡын аҡса күсереүгә булышлыҡ иткән. Бынан тыш, халыҡта боҙло һыу менән ҡойоноуға ҡарата ла ҡыҙыҡһыныу артҡандан арта бара. Түбәндә сынығыуҙың был ысулы һәм көнбайыштан килгән яңы тулҡын тураһында бер нисә һүҙ.**

Ice Bucket Challenge флешмобы шарттарына ярашлы, боҙло һыу менән ҡойонорға, артабан флешмобҡа ҡушылырға тейеш өс кешенең исемен атарға һәм ошоно видеоға төшөрөп, интернет селтәренә һалырға кәрәк. Иң мөһиме, башынан аша боҙло һыу ҡойорға баҙнат итеүселәр ҙә, быны эшләүҙән тыйылыусылар ҙа ҡаты сирләгән балаларға ярҙам итеүсе хәйриә фондтарына бер тәүлек эсендә аҡса күсерергә бурыслы. Баш ҡалабыҙҙа Ice Bucket Challenge флешмобын "Manhattan" электрон журналының элекке редакторы Рөстәм Ғәлиев башлап ебәргән. Бөгөн уға республикабыҙҙың билдәле сәйәсмәндәре, етәкселәре, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, сәхнә йондоҙҙары дәррәү ҡушылған. "Беҙҙең балалар" хәйриә фонды етәксеһе Ольга Власова әйтеүенсә, флешмобтың әһәмиәте күсерелгән сумма менән түгел, халыҡҡа фонд тураһында мәғлүмәт биреләүе, һөҙөмтәлә 14 етди шәфҡәт күрһәтеүсенең иғтибарын йәлеп итеүе менән билдәләнә. Ә ҡойоноусылар араһында кемдер акцияла ҡатнашып, үҙе тураһында яҡшы фекер ҡалдырыуҙы маҡсат итһә, берәүҙәр изге эш башҡарҙы, икенселәр тағы бер ҡат һаулыҡтарын һынап ҡараны.

Йәй айында башланған Ice Bucket Challenge флешмобы көҙгө һалҡындарҙа ла дауам итә. Боҙло һыуҙы бер тапҡыр баштан аша ҡойоуҙың бер ниндәй ҙә файҙаһы булмаһа ла, даими ҡойоноуҙың ыңғай яҡтары бихисап. Мәҫәлән, һыуыҡ һыу менән ҡойоноу кешенең иммунитеты һәм эске биҙҙәр системаһы эшен көйләй, тән күҙәнәктәрендәге процестарҙы тиҙләтә, һалҡын тейҙереп ауырыуҙан һаҡлай. Бынан тыш, ғалимдар фекеренсә, һыуыҡ һыу менән ҡойонған кеше үҙен күпкә бәхетле тоя. Сөнки был процедура һәр ваҡыт организмға яңы көс, дәрт өҫтәй, кәйефте күтәрә һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙары менән сирләү хәүефен кәметә. Һыуыҡ һыу менән ҡойонған ваҡытта тәндәге бөтөн рецеп-

*✓ Ниндәй хәрефте нисек итеп уҡырға бирәү күңелемә һалып ҡына торғандай. "Фәтиха" сүрәһен ғәрәпсә уҡып сыҡтым, "Бәҡара" сүрәһенә күстем. Төнө буйы Аллаһы Тәғәләмә рәхмәттәр әйтә-әйтә, Ҡөрьән уҡыным. Арыу-талыу ҙа юҡ.*

инде. Алға уҡ сығып, фарыз намаҙына ҡәмәт әйтә башланы. Ошо мәлдә мәсеттә нимә башланғанын күрһәгеҙ, иҫегеҙ китер ине! Таһир мулланың ауаздары ишетелеү менән теге шәүләләр стеналарға һырлығып, юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Ниһәйәт, мәсет "ят есемдәр" шәүләләренән арынды. Шул саҡ мәсет эсенә ниндәйҙер бер илаһи нур төштө, тирә-яҡ яҡтырып китте. Ауыр йоҡонан арынғандай, кешеләр берәм-һәрәм намаҙға тора башланы. "Фәрештәләр төштө", тип уйлап ҡуйҙым мин ҡыуанып. Таһир мулла алҡынып-алҡынып намаҙ уҡый, беҙ уға ойоп намаҙ атҡарабыҙ. Күңелдә шундай һиллек, еңеллек! Бына шунда аңланым да инде мин Ҡөрьәнде дөрөҫ итеп, тәжүид менән уҡыуҙың ниндәй көскә эйә булғанын. Таһир мулланан ҡайһылай ҡоттары осоп тора шайтандарҙың. Хатта әллә ҡайҙан килгәнен белеп-танып торалар. Шул саҡта үҙемә мотлаҡ ғәрәпсә уҡырға өйрәнергә, тәжүид фәнен үҙләштерергә һүҙ бирҙем, сөнки минең Ҡөрьәнде транскрипция хәлендә уҡыуым, һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтә белмәүем диндә нулгә тиң булғанын ошо ваҡиғанан һуң яҡшы аңланым.

Бер-нисә йыл элек ауылыбыҙға ғәрәп илдәренең береһендә белем алып йөрөгән Рәсүл атлы егет эшкә килде. Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, шундай аҡыллы, белемле, ниндәй генә һорау килеп тыуһа ла, уға аныҡ һәм аңлайышлы итеп яуап бирә. Ҡарайым да, аптырайым: собханаллаһ машаллаһ, әллә йәшәп тыуған был бала! Белмәгән нәмәһе юҡ. Тыныс холҡло, белемле, ихлас егетте район халҡы бик тә яратып ҡабул итте. Эш башлау менән мәсеттә дин дәрестәре ойоштороп ебәрҙе. Әлеге лә баяғы, көҙгө дәрестәргә ваҡыт тапмамыш булып, алыҫ тип йөрөй алманым. Яҙ еткәс, Рәсүл хәҙрәт тағы дәрестәр ойоштора икән тип ишетһәм дә, инде ике аҙна самаһы ваҡыт үтеп китһә лә, һаман да бара алмай йөрөйөм. Мөҙҙәте етмәгәндер инде...

...Бер көн иртәнсәк йөрәгем дарҫлап тибеп уяндым. Уйымда тик бер генә нәмә: бөгөн үк мин ғәрәпсә өйрәнергә тейеш! Ашағым да килмәй, эскем дә. Бер кем менән һөйләшкем дә килмәй. Нисек итеп ғәрәпсә өйрәнергә, тип уйлап тик йөрөйөм. Эшкә киттем. Төшкә ҡайтҡан саҡта урамда таныш апайҙы осраттым. Ул ваҡытында ғәрәпсә уҡырға өйрәнеп алып, хәҙер инде Ҡөрьәнде шартлатып ғәрәпсә уҡый. Уға ялбарам: "Зинһар өсөн генә, - тим, - мине ғәрәпсә уҡырға өйрәтегеҙ әле". Аптырап китте: "Мин уҡыта алмаҫмын ул, Рәсүл хәҙрәт уҡыуҙар ойоштороп ята бит, шунда бар", - тип кәңәш бирҙе. "Ярар", - тинем дә, үҙем уйлайым: "Әлепте таяҡ тип тә белмәйенсә, шул тиклем халыҡ араһына барып ултырыуы оят бит әле ул. Былтыр көҙ бер курс уҡып алғас, ундағылар шартлатып уҡыйҙыр инде. Юҡ, улар менән бергә уҡып булмаҫ. Яңы төркөм асылғас йөрөрмөн әле".

Ул көндө киске сменала эшләй инем. Китапханала кеше әҙ. Һәр саҡ эш өҫтәлемдә ятҡан Әлифбамды алып, үҙаллы өйрәнә алмаҫмынмы икән, тип уйлап, китап асып ҡараштырырға булдым. Уҡып ҡарайым тиһәм, әстағәфирулла тәүбә, ултырғысымдан ҡолап төшә яҙҙым хатта - Әлифбалағы ғәрәп хәрефтәре таныш, өңдәре лә үҙенән-үҙе ауыҙымдан сығып тора, биттәрен аса барам, уҡый барам. Эшем бөтөүгә (шул арауыҡта китапханаға бер әҙәм дә инеп сыҡманы) мин Әлифбамды тулыһынса уҡып сыҡҡайным инде. Эй ҡыуандым, эй ҡыуандым! Күңелем йырлай! Осоп тигәндәй ҡайтып еттем дә, сәйҙә эсеп тормай, Ҡөрьән уҡырға ултырҙым. Ниндәй хәрефте нисек итеп уҡырға бирәү күңелемә һалып ҡына торғандай. "Фәтиха" сүрәһен ғәрәпсә уҡып сыҡтым, "Бәҡара" сүрәһенә күстем. Төнө буйы Аллаһы Тәғәләмә рәхмәттәр әйтә-әйтә, Ҡөрьән уҡыным. Арыу-талыу ҙа юҡ. Шатлығым эсемә һыймай, кемгә һөйләргә лә белмәйем. Шулай ҙа өндәшмәй торорға булдым, йә синегеп ҡуйыр.

Икенсе көн кис етеүҙе саҡ еткерҙем. Мәсеткә уҡырға барам бит бөгөн! Икенсе курста уҡыған уҡыусылар менән бергә ултырып уҡырға хоҡуғым бар хәҙер! Мин ниндәй бәхетле! Бына бит, һәр нәмәнең үҙенең мөҙҙәте була икән, минең дә ғәрәп телен өйрәнеү мөҙҙәтем еткән. Әлдә генә шул ваҡытты үткәреп ебәрмәй, белмәһәм дә, Әлифбамды тотоп асып ултырғанмын, тип үҙемде маҡтап алам. Шулай булмаһа, мөҙҙәт тигәндең ҡойроғон да тотоп булмаҫ, үтер ҙә китер ине.

Кисен мәсеткә ашыҡтым. Унлап кеше йөрөй икән дәрескә. Йәштәр ҙә, ололар ҙа бар. Башҡалар менән бергә һәүетемсә генә уҡып алып киттем. Икенсе курста булһалар ҙа, ҡайһы бер нәмәләрҙе минән һораған булалар, мин инде белемсе булып, уларға өйрәтеп ебәрәм. Хәрефте танып белеү генә түгел, өндәрҙе дөрөҫ итеп сығара ла белергә кәрәк. Хәрефтәре әҙ булһа ла, бик ҡатмарлы тел ул ғәрәп теле. Әммә шуныһы һәйбәт, ундағы бар хәрефтәр ҙә тиерлек башҡорт телендә бар.

Бына шулай, мәсеттә булған хикмәтле бер ваҡиға күп нәмәләргә минең күҙемде асып, Ҡөрьәнде ғәрәп телендә уҡырға өйрәнеүемә этәргес көс бирҙе. Бер һүҙ сыҡҡанда Таһир муллаға шул ваҡиға тураһында һөйләп бирҙем. "Ҡасан булды был хәл?" тип һораны ла, йылын әйткәс: "Ул ваҡытта булһа булғандыр", - тип яуап бирҙе. Ул саҡта мин көслө инем шул, тип әйтергә теләгәндәй, үҙе көрһөнөп ҡуйҙы.

Хикмәттәр күп инде ул. 2013 йылдың ҡышында бер төркөм кешеләр менән урманда ҡала күрергә насип булды. Уны "мираж" тип атап, халыҡ берғауым геү килеп алды. БСТ-нан, Мәскәүҙәге РЕН ТВ-нан килеп төшөрөп алып киттеләр, үҙебеҙ ҙә "Телеүҙәк"кә барып, күргәндәребеҙ хаҡында һөйләп ҡайттыҡ. Параллель донъя бар инде ул. Ҡөрьәндә лә әйтелә бит, Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе һәм ендәрҙе яралтҡан, тип. Ысынлап та улар бар һәм беҙҙең менән бергә йәшәй, тик беҙ уларҙы күрмәйбеҙ генә. Ендәр кешеләр араһында күпселек кешеләр ҡиәфәтендә йөрөй, тиҙәр. Шуға ла уларҙы танып-белеү, күреү ябай кешенең көсөнән килмәй. Ә шайтандар ҡиәфәттәрен үҙгәртә алмай, улар кешеләргә ҡарағанда көсһөҙ заттар. Улар араҡы эскән, тәмәке тартҡан, кәрт уйнаған, бысраҡ урындарҙы ярата. Шайтандарҙан һаҡланам тиһәң, баяғы урындарҙан алыҫ торорға, йорт-ҡураңды таҙалыҡта торорға, доға уҡып торорға, гонаһ уйҙар уйламаҫҡа, гонаһ эштәр ҡылмаҫҡа кәрәк инде. Берәй төймәләй генә нәмә урланыңмы, берәйһе тураһында насар уй уйланыңмы, көйҙөң йә шашындыңмы - шайтан янынға килеп тә етә, яҙыҡ эштәреңде артабан дауам итергә ҡоторта башлай. Бер эйәләтһәң, ул шайтандан тиҙ генә ҡотолормон тимә. Үҙ-үҙең өҫтөңдә эшләргә, юҡ-барға көймәҫкә, сетерекле хәлдәрҙе көймәй-талашмай ғына үткәрә белергә өйрәнергә кәрәк. Шайтандарҙың кешеләрҙе көйгән, эскән, артыҡ шашынып ҡыуанған сағында аңдып, артынан ҡалмай йөрөгәнен күргәнем бар. Өйөңдө һәр ваҡыт таҙа тотоу, әленән-әле аҙан ҡысҡыртып, Ҡөрьән уҡыу мәжлестәрен ойоштороп, ваҡыт-ваҡыты менән артыш менән ыҫлап тороу өйҙө таҙартһа, намаҙҙа булыу, һәр ваҡыт доғалы, матур уйҙа йөрөү, кешеләрҙе, үҙең йәшәгән ерҙе, тәбиғәтте яратыу кешенең үҙен таҙарта. Ундай өйҙәрҙе, кешеләрҙе фәрештәһе һаҡлай, тормошо ыңғай, йорто ҡотло, үҙе һөймәлекле була. Шайтан бар ерҙә фәрештәләр булмай. Беҙҙең эргәбеҙҙә фәрештәләрме, әллә шайтандармы - тик үҙебеҙҙән генә тора, дуҫтар.

**Фәриҙә АЙЫТБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**
**(Аҙағы. Башы 36, 37-се һандарҙа).**

торҙар ҡуҙғый, һөҙөмтәлә нервылар системаһы әүҙемләшә, тәндең арыуы бөтә. Бигерәк тә быуындар шешеүенән, тамырҙар тартышыуынан, шешенеүҙән, һытҡы сығыуҙан һәм башҡа төрлө тән ауырыуҙарынан, ҡатын-ҡыҙ сирҙәренән яфаланыусылар өсөн уның файҙаһы ҙур. Сәләмәтлек өсөн һыуыҡ һыу менән ҡойоноуҙың әһәмиәте ни тиклем юғары булһа ла, һәр кем үҙенең һаулығына ҡарап эш итергә тейеш. Әгәр ҙә ниндәйҙер хроник ауырыу менән яфаланһағыҙ, процедураны башлар алдынан мотлаҡ табибтар кәңәшенә ҡолаҡ һалырға кәрәк. Шулай уҡ, йөрәк-ҡан тамырҙары, бәүел ағзалары сирлеләргә айырым программа буйынса сынығырға кәңәш ителә. Белгестәр фекеренсә, улар башта дөрөҫ туҡланыуҙы яйға һалырға, үләндәр менән дауаланырға тейеш. Артериаль ҡан баҫымы үтә түбән, йә юғары булған осраҡта, грипп, тимрәү, эренле яралар сыҡҡанда ла ҡойона башларға кәңәш ителмәй. Һыуыҡ һыу менән ҡойоноуҙың тәртибе ябай - башлағанда һыу 30 градус йылы булырға тейеш. Биҙрә менән баштан аша бер тынала ҡойоноу тәҡдим ителә, сөнки һыуыҡ душ аҫтында торғанда һалҡын тейҙерергә мөмкин. Ағып төшкән һыу тотош тәнегеҙҙе ҡапларға тейеш. Шулай уҡ, белгестәр ҡойонғандан һуң бер аҙ күнекмәләр эшләп, йылынып алырға тәҡдим итә. Ә бына таҫтамал менән оҙаҡ һөртөнөргә кәрәкмәй, һыу үҙе кибеп бөтөүен көтөүе яҡшыраҡ була икән. Һыуыҡ һыу менән ҡойоноу ни тиклем сирҡаныс тойолһа ла, һуңынан организм үҙенән үҙе өйрәнеп, эш еңеләйәсәк. Шуға күрә, бер ҡасан да сыныға башларға һуң түгел, балалар өсөн дә, ололарға ла был тик файҙаға ғына буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Донъя кимәлендә хәйриә фондтарына иғтибарҙы йәлеп итеү, ауырыуҙарға ярҙам итеү маҡсатында башланған Ice Bucket Challenge флешмобының тағы бер ыңғай яғы - ул һыуыҡ һыу менән ҡойоноп ҡарарға баҙнат итә алмай йөрөүселәргә быны эшләп ҡарарға этәргес тә булды. Бер тапҡыр һыуыҡ һыуҙың шифаһын тойоусылар араһында был эште дауам итеүселәр табылһа, тағы ла яҡшыраҡ буласаҡ. Ер йөҙөндә ҡаты сирләүселәргә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған изге күңелле кешеләр һаны ғына түгел, сәләмәттәре лә артыуын күрер инек.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Ышаныс: компетентлыҡ үҙ-үҙеңә ышанмаусанлыҡты ҡаплай алмай

"Кем бөтөн нәмәне үҙе эшләргә һәм эшләнгән эш өсөн барлыҡ ҡаҙанышты үҙенеке итеп күрһәтергә теләй, ул бер ваҡытта ла бөйөк лидер була алмай", тигән Эндрю Карнеги атлы бер сәнәғәтсе. Эйе, бер кем дә үҙ ҡарашына ҡаршы килгән режимда йәшәй алмай. Быны һеҙ кешеләрҙе күҙәтеп тә күрәһегеҙ. Әгәр кемдер үҙенә һәр саҡ еңелеүсе итеп ҡарай икән, ул һәр саҡ еңелеү юлын табасаҡ. Кешенең үҙенә ышанысы булмау сәбәпле, уңыш һәр саҡ унан ҡасып китә икән, һөҙөмтәлә ул үҙен "ашай" башлаясаҡ. Был кемдеңдер артынан эйәреүселәргә генә түгел, ә лидерҙар өсөн дә хас.

Үҙ-үҙенә ышанысы булмаған лидерҙар үҙҙәре өсөн дә, уларҙың артынан эйәреүселәр өсөн дә, етәкләгән ойошма өсөн дә ҡурҡыныс, сөнки лидер вазифаһы уның шәхси етешһеҙлеген тәрәнәйтә генә. Тормош дауамында артығыҙҙан эйәреп килгән уңышһыҙлыҡ багажы башҡаларға етәкселек итергә тырышҡан ваҡытта тағы ла ауырыраҡ буласаҡ.

**Үҙ-үҙҙәренә ышанысы булмаған лидерҙарҙың уртаҡ бер нисә сифаты бар:**

**Улар башҡаларға ышаныс һәм хәүефһеҙлек тойғоһо бирмәй.** Үҙеңдә булмағанды кешегә биреп булмай, ти боронғо мәҡәл. Шуның кеүек үк, һәләте булмаған кеше уны башҡаларға бирә алмаған кеүек, үҙ-үҙенә ышанысы булмаған лидер башҡаларҙы ла үҙен ышаныслы тойорға мәжбүр итә алмай. Ҡыҫҡаһы, артыңдан башҡалар эйәрерлек йоғонтоло лидер булыр өсөн эйәреүселәрҙә үҙҙәре тураһында яҡшы фекер тыуырға тейеш.

**Улар биргәнгә ҡарағанда күберәкте ала.** Үҙ-үҙенә ышанысы булмаусылар, һәр саҡ эске ҡурҡыу кисереүселәр, тирә-яҡтағыларҙың үҙҙәренең дәрәжәһен һәр саҡ раҫлап тороуҙарына, хуплауҙарына һәм яратыуҙарына мохтаж. Шул сәбәпле, улар һәр саҡ именлек һәм ышаныс эҙләй, ә башҡаларҙа ошо тойғоларҙы үҫтереү тураһында уйламай. Бындай кешеләр, тәү сиратта, бирмәй, ә ала; әммә алырға тырышыусыларҙан яҡшы лидер сыҡмай.

